*"Йәлләү - кешелә булған иң изге хис-тойғо; әммә үҙеңде йәлләү - иң оятлылыр, моғайын. Үҙ-үҙеңде йәлләү һинең тулыһынса тормошҡа әҙер түгеллегеңде, ысынбарлыҡты ҡабул итеүеңде тулыһынса боҙоп күрһәтеүсе насар ауырыу... Был сифат үҙенең ҡолдарын буш боғаҙға һәм мәртәткә әйләндереүсе үҙенсәлекле наркотик".*

**Юджин Петерсон.**


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2 - 8 АВГУСТ (УРАҒАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№31 (605)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Милли матбуғатты уҡып...**

телебеҙҙе лә, үҙебеҙҙе лә һаҡлайбыҙ



3

**Иң камил өлгөгә...**

етеп булмағанда ла, ынтылырға кәрәк



5-6

**Туған телдең яҙмышы...**



8-9 шул телдә һөйләшкән кешеләр ҡулында

**Нәфсегә баш булайыҡсы,**

йәки еләк һатҡан ҡатындар тураһында бер кәлимә



13

14 ТВ-программа


### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Мәғариф хеҙмәткәрҙәренең традицион август конференциялары башлана. Унда сығыш яһау мөмкинлеге булһа, ниндәй мәсьәләләр күтәрер инегеҙ?




***Римма БАЙМЫРҘИНА, Әбйәлил районы Таһир Кусимов исемендәге гимназияның башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы:*** Бөгөнгө көндә белем биреү өлкәһендә, бигерәк тә әсә телен уҡытыуҙа, хәл итәһе мәсьәләләр етерлек. Матбуғатта ла әсә телен уҡытыу буйынса бәхәстәр ҡуйырғандан-ҡуйыра. Бигерәк тә "Киске Өфө" гәзите был темаға бик йыш әңгәмәләр уҙғарыуы менән хуплауға лайыҡ. Ғалимдарыбыҙ башҡорт телен уҡытҡанда ҡоро грамматикаға ғына баҫым яһамайыҡ, тип оран һала, ләкин әле булһа ошо өлкәлә аныҡ ҡына ҡарарға килә алмайбыҙ. Ысынлап та, балаларға грамматика, теория уҡытыуҙы ғына түгел, ә әсә телендә ижади фекерләүҙе, матур әҙәбиәткә һөйөү тәрбиәләүҙе маҡсат итеп алырға кәрәк ул.

Тел уҡытыу программаһын төҙөгәндә телдән дә, әҙәбиәттән дә уҡыусыларҙың йәш кимәле иҫәпкә алынырға тейеш. Үтә ауыр, тарихи әҫәрҙәрҙе, әйтәйек, Ғ.Ибраһимовтың "Кинйә", Б.Бикбайҙың "Ҡаһым түрә" әҫәрҙәре X класта үтелһә, уҡыусыларға аңлайышлыраҡ булыр ине. Башланғыс кластарҙа уҡ тарихи романдарҙан өҙөктәр уҡытып, күп һүҙҙәрҙе аңламаған баланы әҙәбиәттән биҙҙерәбеҙ.

Йәштәр әҙәбиәткә һүлпән килә, тип яр һала яҙыусыларыбыҙ. Ә программала берәй йәш әҙәбиәтсенең әҫәрен табып буламы? Рухлы уҡытыусылар үҙҙәре әүҙем ижад иткән яҙыусылар ижады менән программанан тыш та таныштырырға тырыша тырышыуын. Ләкин барыбер ҙә уҡыу программаларына бөгөнгө көн геройҙарын, ысынбарлығын яҡтыртҡан йәш яҙыусыларҙың да әҫәрҙәре индерелһен ине тигәнде күп уҡытыусыларҙың теләге тип беләм.

DVD, компьютерҙар замандағы балаға китап тоттороуы ауыр. Шуға күрә, әҙәби әҫәрҙәрҙе (өҙөктәрҙән тыш) дискыларға яҙҙырып һатыуға сығарыу яйға һалыныр, тип тә көтәбеҙ. Был уҡытыу процесында ҙур ярҙам булыр ине.

Белем биреү системаһында юлға һалыуҙы талап иткән тағы бер мәсьәлә: дәреслек төҙөгән авторҙарҙың уҡытыусылар менән берлектә ижад итеүе. Әлеге ваҡытта был бәйләнеш бөтөнләй юҡ кимәлендә. Бер-беребеҙҙең һүҙенә, кәңәшенә, теләгенә ҡолаҡ һалып эшләгәндә, дәреслектәр һәм уҡытыу кимәле тағы ла күтәрелер ине, тип уйлайым.

Белем тауына үрләгәндә баланың ҙур уңышҡа өлгәшеүендә уҡытыусының роле ҙур. Беҙ ижадсы булырға тейешбеҙ. Һәр уҡыусыны шәхес итеп күрә һәм уның һәр аҙымын баһалай белеүебеҙ мөһим. Балалар менән эшләүе еңел, сөнки хәҙерге уҡыусылар аң, аҡыл йәһәтенән үҫешкән, психологик яҡтан тотороҡлолар. Улар күңеленә, тәү сиратта, рухи ҡиммәттәр һалыу зарур һәм беҙ ошо йүнәлештә әүҙем эшләргә тейешбеҙ. Йәш быуын ғәмһеҙлектән, вайымһыҙлыҡтан, моңһоҙлоҡтан, ялҡаулыҡтан өҫтөн булып үҫәсәк, тип ышаныс менән әйтә алам. Быны шулай булыуында беҙҙең дә өлөш барлығын күреү илһамландыра, хеҙмәтебеҙҙең баһаһын күтәрә.

**(Дауамы 2-се биттә).**

### АФАРИН!

# "БЫЙЫЛ ҒЫНА ӨС ЕҢЕҮ ЯУЛАП,

## мәҙәниәткә ат кеүек хеҙмәт итеүемде раҫланым..."




**Беҙҙең илдә "Рәсәйҙең беренсе гармунсыһы" исемен йөрөткән музыкант, композитор, йырсы, шағир Геннадий Заволокинды иҫләмәгән кеше бик һирәктер. Һикһәненсе йылдарҙа ул нигеҙ һалған "Играй, гармонь любимая!" телевизион тапшырыуы миллионлаған тамашасының һөйөүен яуланы, алып барыусы үҙенең ихласлығы, ябайлығы һәм һөйкөмлөлөгө менән хатта музыканан йыраҡ торған кешеләрҙе лә арбай белде. Ә күпме төпкөл төбәктәрҙә йәшәгән таланттарҙы сәхнәгә сығарҙы ул! Уның фажиғәле үлеменән һуң да ысын мәғәнәһендә халыҡ проектына әйләнгән телетапшырыу юҡҡа сыҡманы - аталарының эшен ҡыҙы Анастасия менән улы Захар лайыҡлы дауам итте. Улар хәҙер таланттарҙы Новосибирск өлкәһе хакимиәте ярҙамы менән ике йылға бер тапҡыр РСФСР-ҙың халыҡ артисы Г. Заволокин исемендәге "Уйна, гармун!" халыҡ-ара фестиваленә йыя. Новосибирскиҙа быйыл өсөнсө тапҡыр үткәрелгән мәртәбәле бәйгелә "Әбйәлилдең беренсе гармунсыһы", Асҡар сәнғәт мәктәбенең ҡурай класы уҡытыусыһы Азат АТАНҒОЛОВ ҡатнашты һәм III урын яуланы. Яҡташыбыҙҙың Америка, Германия, Израиль, Румыния кеүек сит илдәрҙән, элекке союздаш республикаларҙан, Рәсәйҙең 60-тан ашыу төбәгенән мең ярым музыкант ҡатнашҡан сарала призлы урын яулауы - бөтә район, республика өсөн оло мәртәбә ул. Азат Ханнан улының үҙенә һүҙ бирәйек.**

**(Дауамы 11-се биттә).**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәпләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ДӨРӨҪ ЮЛДАН БАРЫУ ӨСӨН...

## белемлеләр кәрәк

**Сәфәрғәли ЙӘНТҮРИН, биология фәндәре докторы, профессор, БДУ-ның Сибай филиалы экология кафедраһы мөдире:** Ун бер йыллыҡ мәктәптәрҙең туғыҙ йыллыҡҡа ҡалдырылыуы, туғыҙ йыллыҡтарҙың башланғыс мәктәпкә әүерелеүе, күп кенә белем усаҡтары ябылыуы уҡытыусылыҡ һөнәренең бәсен төшөрҙө. Уның баһаһы төшкәс, вуздарға уҡытыусы һөнәрен үҙләштерергә килеүселәр һаны ҡырҡа кәмене. Эш булмаҫын алдан белгәс, ниңә йәштәр ваҡытын бушҡа әрәм итеп йөрөһөн инде? Уларҙы һүҙ һөйләп, биш йылдан һуң донъялар үҙгәрер, һеҙгә эш булыр, тип алдатып булмай. Донъя ҡайһы яҡҡа үҙгәреүен ҡайҙан беләһең әле. Бөгөн беҙгә уҡытыусы һөнәренең абруйын арттырыу, балалар уҡырға инһен өсөн юғары уҡыу йорттарында был һөнәр буйынса бюджет урындары һанын ҡыҫҡартыуҙы туҡтатырға кәрәк. Артабан йәш белгестәргә эш урындары булһын өсөн матур традициялы, әҙме-күпме балалар уҡыған мәктәптәрҙе яптырмайынса һаҡлап ҡалырға ине. Был мәктәптәр ябылыу менән юғалған шул традицияларҙы биш-алты йылдан яңынан тергеҙергә тура киләсәк, өҙөлгәндә кире ялғауы еңел булмаҫын башҡа миҫалдарҙан да белеп, күреп торабыҙ бит. Теге яҡҡамы, был яҡҡамы, тип, ҡайҙа юлланырға белмәйенсә, бер үк тырмаға яңынан баҫыуҙан яҡшы һөҙөмтә сыҡмаҫы көн кеүек асыҡ. Сәбәпләнеп, күп мәктәптәрҙе яптырып, эшһеҙҙәр сафын тулыландырабыҙ. Совет заманында кеүек, мәктәптәрҙе ябыу буйынса планды арттырып үтәргә тырышыусылар араһында ярыш башланды. Кем иң күп мәктәп ишегенә йоҙроҡ дәүмәлендә йоҙаҡ элеп ҡуя, шул герой, йәнәһе.

Йәмғиәттең тотҡаһы, һәр милләтте алға әйҙәүсе - ул уҡытыусы, белемле кешеләр икәнен иҫтән сығармайыҡ. Юғары белемле кеше ҡайҙа ғына йөрөһә лә, хатта алған һөнәре буйынса эшләмәгән хәлдә лә, бер ҡасан да юғалып ҡалмаясаҡ. Ул барыбер йәмғиәтте дөрөҫ юлдан алып барырға һәләтле. Башҡорт халҡының киләсәге тап ошондай шәхестәр ҡулында буласаҡ.

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Мәғариф хеҙмәткәрҙәренең традицион август конференциялары башлана. Унда сығыш яһау мөмкинлеге булһа, ниндәй мәсьәләләр күтәрер инегеҙ?

**(Башы 1-се биттә).**

***Сәлимә ИШБИРҘИНА, Өфө ҡалаһы:*** Ғаиләбеҙҙә 5 бала тәрбиәләнә. Өсәүһе мәктәптә тамамлап, юғары уҡыу йортонда белем ала, ә икәүһе әлегә мәктәп уҡыусылары. Яңы уҡыу йылы башланғанын хәүеф менән көтәбеҙ, сөнки 11 класҡа бараsаҡ улыбыҙҙың Берҙәм дәүләт имтихандарын уйлап, кәйефе юҡ. Балаларҙы БДИ менән шул тиклем ҡурҡытып бөткәндәр, уларҙың башҡа нимә хаҡында уйларға теләктәре лә, хәлдәре лә юҡ. Сентябрҙә үк уҡытыусылар БДИ хаҡында тылҡый башлай, уның ни тиклем ҡатмарлы һәм ауыр икәнен көн һайын иҫтәренә төшөрөп кенә тора. Балалар иҫәр түгел, улар донъя хәлдәрен күреп-ишетеп йөрөй, имтиһандың ниндәй ауыр шарттарҙа үтеүенә шаһиттар. Шулай булғас, ни өсөн уҡытыусылар балаларҙы тынысландырыу урынына йөрәктәренә ҡотҡо һала икән, тип аптырайым.

Быйылғы БДИ-ның видеокамералар аҫтында үтеүе, уҡыусыларҙың кластарға металл тикшереү ҡоролмалары аша инеүе балаларға психологик яҡтан тәрән эҙ ҡалдырғандыр, тип уйлайым. Оло тормошҡа яңы аяҡ баҫырға торған йәштәрҙең рухын һындырыу, уларға ышанмаусанлыҡ белдереү булды был аҙым. Ә шул уҡ ваҡытта аэропорт, тимер юлы һәм автобус вокзалдарының барыһы ла бындай ҡоралдар менән йыһазландырылмауы балаларҙы террористарҙан ҡурҡынысыраҡ ҡиәфәткә индерҙе.

Тағы ла шул. Тест формаһындағы имтиханға әҙерлек уйламай ғына ятлауға ҡайтып ҡала (тап водитель танытмаһы алыуға имтихан биргән кеүек, минә ҡалһа). Был иһә балаларҙың ижади фекерләү һәләте юғалыуына алып килә. Инша яҙыу юҡ итеЛДе, тимәк, уларға үҙ уйын формалаштырыу оҫталығы камиллашмай. Әҙәби әҫәрҙәрҙе анализлау бөтөрөлдө, тимәк, китаптар уҡыуға ынтылыш һүнә. Быларҙың барыһы ла уҡытыусыларҙың хеҙмәтен юҡҡа сығара түгелме? Уйланырға урын бар бында, минеңсә.

Шулай уҡ тағы бер мәсьәләне күтәрмәй булмай. Оптималләштереү һүҙенә ышыҡланып, мәктәптәрҙе ябыу күренеше, ҡыҙғаныҫҡа ҡурә, тотош Рәсәйҙе ялмап алды. Балалар әҙлегенә һылтаналар, ләкин бер-нисә йылдан уларҙың һаны артасаҡ, сөнки демографик хәл йылдан-йыл яҡшыра бара. Быға халыҡ һанын арттырыу маҡсатында тормошҡа ашырылған төрлө дәүләт программалары ла булышлыҡ итә. Бөгөн ике, өс һәм унан да күберәк балалары булған ғаиләләр күп. Был йәһәттән дәүләт сәйәсәтен аңлап булмай. Бер яҡтан, халыҡ һанын арттырыуға ҙур иғтибар бүленә. Ә шул уҡ ваҡытта мәктәптәрҙең ябылыуы ул балаларҙы киләсәктә белемһеҙ итергә тырышыу һымаҡ тойола. Белемһеҙ халыҡ менән идара итеү күпкә еңел шул. Шуға ынтылалар, буғай.

***Әнүзә КӘРИМОВА, география уҡытыусыһы, Белорет районы:*** Мин иһә сығышымда үҙем уҡытҡан фәнгә ҡағылышлы мәсьәләләрҙе күтәрер инем. Мәктәптәрҙә дәрестәр һаны икеләтә ҡыҫҡартыла, ә талаптар шул уҡ ҡала. Элек өс дәрестә биргән материалды хәҙер бер сәғәт эсендә һөйләп, аңлатып бөтөргә кәрәк. Ә шул уҡ ваҡытта география баланың төрлө яҡлап үҫешенә булышлыҡ итә, сөнки ул тарих менән дә, әҙәбиәт менән дә, музыка һәм башҡа фәндәр менән дә тығыҙ бәйләнгән.

Бөгөнгө Рәсәйҙең, бар донъя илдәренең яҡшы, аныҡ һәм аңлайышлы итеп төҙөлгән карталары булмауы бәкәлгә һуға. Әлбиттә, барыһын да интернет ярҙамында ҡарап була, ләкин һәр мәктәптә лә компьютерҙар менән йыһазландырылған география кабинеттары юҡ. Шулай уҡ үҙебеҙ йәшәгән төбәкте өйрәнеү өсөн дә материалдар әҙ. Ғөмүмән, предметтың кәрәклеге инҡар ителә. Бының шулай икәнлеген юғары уҡыу йорттарында ҡабул ителгән БДИ-ға ҡарап та белеп була. Туризмды ойоштороу эшен үҙләштерергә теләйеш абитуриенттар география түгел, ә йәмғиәтте өйрәнеү (обществознание) фәненән БДИ тапшыра.

Ғөмүмән, һөйләһәң, хәл итәһе мәсьәләләр күп. Ләкин бер туҡтауһыҙ бәлә һалыуҙан, улар бөтмәйәсәк. Беҙгә барыбыҙға ла - уҡытыусыларға, ата-әсәләргә, уҡыусыларға берҙәм булырға кәрәк. Шул саҡта алда ниндәй генә проблема тормаһын, уны ыңғай хәл итеү яйы табыласаҡ.

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Дуҫтарығыҙ, таныштарығыҙ араһында 2014 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө" гәзитенә яҙылырға оноткандар барҙыр. Уларҙы иҫкәртегеҙ әле: гәзитебеҙҙе сентябрҙән алдыра башлау мөмкинлеге бар. Уның өсөн 17 августҡа тиклем почта бүлексәләренә барып, 50665 индекслы гәзитебеҙгә яҙылып ҡуйһындар. Дүрт айға яҙылыу хаҡы 338 һум 40 тингә генә төшәсәк.**




● Шулай уҡ августан "Киске Өфө" гәзитенә 2015 йылдың тәүге яртыһы өсөн дә яҙылырға мөмкин. Яҙылыу миҙгеленең һәр айында уҡыусыларыбыҙ өсөн дәртләндереү сараһы барлығын да беләһегеҙ: был юлы ла **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"; "История башкирского народа"; Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"; 2015 йылға "Башҡортса дини календарь"** һәм башҡа китаптарға лайыҡ булырға теләгәндәр 2015 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәрергә онотмаһын.

● **Беҙҙең сайт:** *www.kiske-ufa.ru.* Беҙҙең электрон почта: *info@kiskeufa.ru.* Беҙҙең блог: *blog. kiskeufa.ru.*

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Хәмитов батырлыҡ ғәмәле ҡылған балаларҙы ҡотланы һәм бүләктәр өләште. Батырлыҡ билдәһе значоктарынан һәм дипломдарҙан тыш, 11 балала Ҡырым республикаһы Алушта ҡалаһындағы "Берег" һауыҡтырыу лагерына путевкалар бирелде. Балалар күрһәткән батырлыҡ һоҡландыра. Мәҫәлән, Сибай педколледжы уҡыусыһы Фиҙәлиә Ғиззәтова йылғала һыу ингән дүрт һәм алты йәшлек ике баланың йылға ағымы ыңғайына ағып китеүен күреп ҡала һәм йылғаға ташланып, уларҙы ҡотҡарып ҡала. Ә Аскын районынан ун өс йәшлек Эльза Юлдашева ҡар өйөмө аҫтында ҡалған ун ике йәшлек бер балаға ярҙамға ташлана.

✓Салауат мәғариф һәм профессиональ технологиялар колледжына Германиянан туҡыу һәм бәйләү станоктары, инвалид коляскалары, мөмкинлектәре сикләнгән балалар өсөн башҡа ҡорамалдар тейәлгән автофургон килде. Был уҡыу йортондағы инвалид уҡыусылар өсөн тәғәйенләнгән мәрхәмәтлек йөгөн Баден-Вюртембергтан "Өфөгә күпер" йәмәғәт ойошмаһы ойоштороған. Башҡортостандың ЮНЕСКО эштәре буйынса комитеты был колледж базаһында инклюзив мәғарифты үҫтереү буйынса халыҡ-ара проектты тормошҡа ашыра. Уның төп маҡсаты - инвалид балалар менән эшләүсе Башҡортостан һәм Германия белгестәренең үҙ-ара тәжрибә уртаҡлашыуы.

✓Өфө халыҡ-ара аэропорты - һауа судноларының бөтә төрөн дә ҡабул итә алырлыҡ заманса авиацион комплекс. Ул көн дә 120 самолетты хеҙмәтләндерә. Аэропорт хеҙмәте менән 40-лап Рәсәй һәм сит ил авиакомпаниялары файҙалана. Әле күптән түгел бында икенсе осоу һыҙаты асылды. Ул Boeing-747 и Boeing-777 кеүек самолеттарҙы ла ҡабул итеү һәләтлегенә эйә.

✓14-17 августа Ф. Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле Калининградта үтәсәк III Халыҡ-ара "Территория мира" мәҙәниәттәр фестивалендә ҡатнашасаҡ. Испания, Япония, Малайзия, Әрмәнстан, Украина һәм Рәсәйҙән килгән билдәле музыканттар һәм бейеү коллективтары Канта утрауында дүрт көн буйы сығыштар яһаясаҡ. Ғәскәровсыларҙан тыш, фестивалдә Мәскәүҙән Игорь Моисеев исемендәге Дәүләт академия бейеү ансамбле, Севастополдән Ҡара диңгеҙ флоты Бейеү һәм йыр ансамбле, Липецк ҡалаһынан "Рәсәй казактары" бейеү ансамбле ҡатнашасаҡ.

ИШАРА

# МИЛЛИ МАТБУҒАТТЫ УҠЫП...

## телебеҙҙе лә, үҙебеҙҙе лә һаҡлайбыҙ

**Һуңғы йылдарҙа кешеләрҙең матбуғат баҫмаларына, китаптарға ҡыҙыҡһыныуы үтә ныҡ кәмене. Бының сәбәптәрен төрлөсә аңлаталар. Берәүҙәр мәғлүмәт сараларының күп булыуына һылтанһа, икенселәре ташҡа баҫылғанды уҡырға яратмаған быуын үҫеп килеүен сәбәп итә. Бөгөн һәр өйҙә тиерлек интернет селтәре булыуы, зәңгәр экрандарҙан күрһәтелгән каналдарҙың күплеге лә баҫмаларға ҙур конкуренция тыуҙырған сәбәптәрҙең береһелер, моғайын.**



Ысынлап та, хәҙер техник фәндәр үтә ныҡ алға китте һәм ҡыҙыҡһындырған мәғлүмәтте төрлө юлдар аша табырға була. Бының өсөн әллә күпме гәзит-журнал алдырыуҙың да, китапханаларҙа сәңгә күмелеп ултырыуҙың да кәрәге юҡ, өйөңдәге телевизорыңды йә иһә интернет селтәрендә тоташтырыу ҙа етә, тип уйлаусылар ҙа бар. Үкенескә күрә, бындай мәғлүмәт сараларының зыянын үлсәп ҡараған, үлсәгәндә лә, халыҡҡа еткергән кеше генә юҡ. Мәҫәлән, Көнбайыш илдәренең вәхшилеккә, аҙым һайын үлтереш, ҡан ҡойош, енси боҙоҡлоҡҡа ҡоролған фильмдары ғына ла халҡыбыҙҙың йәшәү рәүешенә үтеп инеп, уны зауығынан яҙҙыра, гөрөф-ғәҙәттәрен, йолаһын емерә икәне тураһында һәр кем дә иҫкә аламы? Нәҡ шундай тапшырыуҙар, фильмдар балаларыбыҙҙы ла сит ҡанундарҙың мәғәнәһеҙ шау-шыуы, ҡаңғырығы аҫтында тәрбиәләргә тырыша. Ләкин күпме генә тырышһаң да, бер халыҡтың менталитетын икенсеһененекенә күсереп ултыртып булмаясаҡ. Әгәр ҙә инде бындай хәл була ҡалһа, милләттең йөҙө, асылы ғына түгел, унның исеме лә юғаласаҡ, тигән һүҙ. Бындай хаталарҙы булдырмау, милли рух, тәрбиә, уҙаң төшөнсәләрен аңлатыу бурысын үтәй ҙә инде милли телдәге баҫмаларыбыҙ, яҙыусыларыбыҙ әҫәрҙәре.

Гәзиттәргә яҙылыу кампанияһы мәлендә район ауылдарына сығып, халыҡ менән осрашып торғанлыҡтан, төрлө хәлдәргә тарырға, төрлө һүҙҙәр, хатта тәнҡитләүҙәр, үпкәләүҙәр ҙә ишетергә тура килә. Берәүҙәр юҡ сәбәпте бар итеп, хатта ҡулына тотоп та ҡарамаған көйөнсә, милли матбуғатыбыҙҙы насарларға тырыша. Икенселәр ниндәйҙер дәғүәләр, тәнҡиттәр белдерә-белдерә, ғүмер буйы милли баҫмаларҙан айырылмай. Уларға ҡарайһың да, ысын уҡыусы нәҡ шулай булырға тейештер ҙә, тип уйлайһың. Үҙенең үпкәләрен, тәнҡиттәрен белдерә-белдерә уҡый икән, тимәк, ул ысынлап та гәзиттең тоғро дуҫы, яратып уҡыусыһы. Ундайҙарҙың үпкәһенә лә, тәнҡитенә лә етдиерәк ҡолаҡ һалырға тырышаһың. Нисек кенә булмаһын, әллә нисә йылдар дауамында гәзит-журналдан айырылмаған, матбуғатһыҙ бер көн дә тора алмаған тоғро дуҫтарыбыҙ етерлек булыуы ҡыуандыра. Осрашыуҙарҙа йөрөй торғас, ҡайҙа күпме гәзит алдырыуҙарын, гәзитебеҙ дуҫтарының ниндәй урамда, ҡайһы өйҙә йәшәүен дә алдан самалап белеп бөтәһең.

Халыҡты гәзитҡа яҙылырға өндәп йөрөгәндә ҡайһы бер кешеләрҙең "гәзитегеҙгә" тигән һүҙҙе йышыраҡ ҡулланыуына ла иғтибар итәһең. Уйлап ҡараһаң, айырым бер журналистың ғына гәзите түгел бит ул, ә халыҡтыҡы. Шулай булғас, был осраҡта гәзитебеҙ тип әйтеү дөрөҫөрәк булыр ине. Үҙебеҙҙеке итеп яҡын күреп торһаҡ, уны һаҡлап, тиражды юғалтмай, киреһенсә, үҫтереү тураһында ла бергәләшеп уйлашырға, хәстәрлек күрергә булыр ине. Ни тиһәң дә, үҙеңдеке һәр саҡта ла үҙәктә була бит ул. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, күптәребеҙ аңлапмы, әллә инде аңлап еткермәйме, үҙ теленән ситләшеп, башҡа телдәге баҫмаға өҫтөнлөк бирә. Ә был инде үҙеңдекеләрҙе һанламай, бөтөнләй сит, һине бар тип тә белмәгән кеше тирмәненә һыу ҡойоу менән бер. Күп осраҡта телебеҙҙе һаҡларға һәм яҡларға тейешлебеҙҙе лә онотоп ебәрәбеҙ шул. Барыны ла үҙ телендә генә фекер йөрөтөп, бары тик ошо нигеҙҙә генә шәхес булып үҫешәсәген һәр саҡта ла хәтерҙә тотһа ине лә бит... Һәр милләттең үҙенә генә хас психологияһы һәм характеры булыуын, уны артабан да камиллаштырыу, үҫтереү өсөн әсә теленең ни тиклем ҙур урын биләүен аңлап етмәүебеҙ ысынлап та хәүефле уйға һала.

Мәҡәләбеҙ һуңында, башҡорт теленең һаулыҡҡа ни тиклем ыңғай тәьҫир итеүе хаҡында мәғлүмәт биреү ниәтенән, Наил Юлдашбаевтың "Башҡорт теленең көсө" мәҡәләһенән өҙөк килтереп үтәйек:

"Көнсығыш илдәрендә, кеше ауырыуҙарының 70 проценты аңдың боҙолоуынан башлана, тигән фекер йәшәй. Аң боҙолоуының бер сәбәбе -психик көсөргәнешлек. Көнсығыш илдәрҙә, мәҫәлән, Һиндостанда, Ҡытайҙа, шул психик көсөргәнешлекте бөтөрөү юлдарын уйлап тапҡандар. Ул медитация тип атала (әлбиттә, медитацияның маҡсаты уның менән генә сикләнмәй). Шуларҙың араһында "Тарабара" тигәне башҡаларҙан ябайлығы менән айырылып тора. Методикаһы ошолай: кеше өндәр әйтергә тейеш. Үҙ телендә булғандарын да, шулай уҡ булмағандарын да. Ни тиклем күберәк әйтһәң, шул тиклем яҡшыраҡ. Алфавит ятлаған кеүек һәр өндө ашыҡмай, дөрөҫ итеп әйтеү кәрәк. Шулай уҡ ҡысҡырып, йәки һуҙып, көйләп әйтһәң, бигерәк тә яҡшы. Ҡайһы бер илдәрҙә һуҙынҡы өндәрҙе көләү формаһында башҡаралар, мәҫәлән, бына ошолайыраҡ: ха-ха-ха, хо-хо-хо, хә-хә-хә, хә-хә-хә...

Бындай медитацияның әһәмиәте нимәлә һуң? Баҡһаң, өндәр аңда барлыҡҡа килгән психик көсөргәнешлекте ҡыуып сығара икән. Иң мөһиме: ниндәйҙер бер өн алып сыға алғанды икенсе өн алып сыға алмай; мәҫәлән, "а" өнө таҙарта алған көсөргәнеште, әйтәйек, "ҙ" өнө таҙарта алмай; ә "ҙ" өнөнөкөнә "ө" хужа түгел h.б. Йәғни һәр өндөң үҙ таҙартыу өлкәһе бар. Шуның өсөн өндәрҙе ни тиклем күберәк белһәң, шул тиклем яҡшыраҡ.

Хәҙер башҡорт теленә әйләнеп ҡайтайыҡ. Беҙҙең алфавитыбыҙҙа 42 хәреф бар, татар телендә - 38, урыҫ телендә -33, инглиз һәм немец телдәрендә 26 хәреф иҫәпләнә. Медитация күҙлегенән ҡарағанда, ҡайһы тел аңды яҡшыраҡ таҙарта? Әлбиттә, башҡорт теле. Беҙҙең телебеҙҙә, әйтергә кәрәк, донъя телдәрендә булған бөтә өндәр ҙә бар тиерлек. Шулай уҡ Урал тәбиғәтендә ишетелгән бөтә тауыштарҙы ла башҡорт алфавитынан табырға була. Ғөмүмән, башҡорт теле - медитатив тел. Был телдә һөйләшкән башҡорттарҙың аңы көн һайын психик көсөргәнештән таҙартыла. Икенсе төрлө әйткәндә, башҡорт теле - ысын мәғәнәһендә аңдың тәбиғи иммунитеты. Бына шуға башҡорттар тыныс холоҡло, ипле һәм донъялары теүәл булыуы менән башҡа халыҡтарҙан айырылып тора. Киң күңелле, ҡунаҡсыл, ваҡтөйәк өсөн тауыш ҡуптарып йөрөмәйҙәр. Бер ваҡытта ла үҙҙәре һуғыш башламаған, йәғни агрессив түгелдәр. Аңдары сәләмәт булғас, һаулыҡтары ла ныҡ. Әйтәйек, XX быуатҡа тиклем беҙҙең крайҙы өйрәнгән ғалимдарҙың бөтәһе лә башҡорттарҙың сәләмәт халыҡ булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алған.

Аңдағы психик көсөргәнешлелекте күп кенә өлөшөн тамаҡ төбөндә барлыҡҡа килгән өндәр таҙартырға тейеш. Башҡорт телендә улар бишәү: *х, ғ, ҡ, һ, н, ә* урыҫ телендә бер *х* өнө генә. Урыҫ телендә *х* өнө тамаҡ төбөндә лә түгел, ә өҫкө аңҡауҙың уртаһында яһала. Күреүебеҙсә, урыҫ теле тамаҡ төбөндә яһалған өндәргә ҡытлыҡ кисерә. Шулай итеп, башҡорт теленең аңды таҙартыу һәләте бик көслө, шуға күрә башҡорт телен донъялағы иң сәләмәт телдәрҙең береһе тип атарға була..."

Бына шулай, хөрмәтле гәзит уҡыусылар, телебеҙҙең ни тиклем бай, ҡабатланмаҫ булыуына бер шик тә юҡ. Шуның өсөн дә уны һаҡлау һәм яҡлау беҙҙең мөҡәддәс бурысыбыҙ. Үҙ телебеҙҙә сыҡҡан баҫмаларҙы алдырып уҡып ҡына ла ошо бурысыбыҙҙы үтәй, һаулығыбыҙҙы ла нығыта алабыҙ.

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**
**Белорет ҡалаһы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓"Башҡортостан" киностудияһының Мәғәфүр Тимербулатов сценарийы буйынса режиссер Вилүрә Иҫәндәүләтова һәм продюсер Азамат Хужахмәтов ҡуйған "Мөрйәнән төтөн сыға әле..." ҡыҫҡа метражлы фильмы сентябрҙә Ҡаҙанда үтәсәк X Халыҡ-ара мосолман киноһы фестивалендә ҡатнашасаҡ. 26 минутлыҡ был документаль фильмда 60 йыл буйы урманда яңғыҙы йәшәгән берәҙәк тормошона арнала. Фильмдың премьераһы оҙаҡламай "Родина" кинотеатрында күрһәтеләсәк. Быға тиклем булып үткән Халыҡ-ара мосолман киноһы фестивалендә Булат Йосоповтың "Визит" ҡыҫҡа метражлы фильмы ла ҡатнашҡайны. Был фильм әлеге конкурс программаһына ла индерелгән һәм Булат Йосопов унда ҡунаҡ булараҡ саҡырылған.

✓Башҡорт дәүләт медицина университетының Пушкин урамындағы 7-се корпусы октябрҙә реконструкцияланып бөтәсәк. Был реконструкция Өфө үҙәген яңыртыу программаһы сиктәрендә тормошҡа ашырыла. Ошо уҡ программа сиктәрендә ремонт-йүнәтеү эштәре атҡарылған Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры - ноябрҙә, Нестеров исемендәге Башҡорт дәүләт художество музейы йыл аҙағында файҙаланыуға тапшырыласаҡ. Шулай уҡ йыл аҙағына "Ҡунаҡһарай" эргәһендәге яңы "Holiday Inn" ҡунаҡханаһын төҙөп бөтөү ҙә планлаштырыла.

✓Өфөлә яңы ике фонтан барлыҡҡа киләсәк. Берәүһе Ленин майҙанында Ленин һәйкәле янындағы сәскәләр түтәле урынында урынлаштырыласаҡ. Икенсе фонтан "Театр" скверында урын аласаҡ.

✓1 августан 1 сентябргә тиклем трамвай юлдарын капиталь ремонтлау менән бәйле Зорге урамында "Өфөгаз"дан "Дәүләт циркы" туҡталышына тиклемгә арауыҡта трамвай хәрәкәте туҡталасаҡ. Был осорҙа 11-се һәм 22-се маршрут троллейбустары йышыраҡ йөрөтөләсәк.

✓"Рәсәй юлдарының хәүефһеҙлеге өсөн" төбәк-ара йәмәғәт үҙәге төҙөгән "юл" рейтингында Башҡортостан 45-тән 41-се урын яулаған. Был күрһәткес быйылғы икенсе кварталда насар юл шарттары арҡаһында килеп тыуған юл-транспорт һәләкәттәре статистикаһына нигеҙләнгән. Апрель-июндә насар юл шарттары сәбәпле 354 юл-транспорт һәләкәте теркәлгән, уларҙа 77 кеше һәләк булған, 438 кеше яраланған. Рейтингтан күреүенсә, иң хәүефһеҙ юлдар Белгород, Калининград, Смоленск өлкәләрендә, Хабаровск крайында, Санкт-Петербургта.

**"Башинформ"дан.**

✔ *Төбәктәрҙең ҡасаҡтар проблемаһын үҙҙәре генә хәл итә алмауынан сығып, уларҙы башҡа төбәктәргә таратыу тураһында ҡарар ҡабул ителде. Тиҙҙән, рәсләнгән квотаға ярашлы, Башҡортостанға күпләп ҡасаҡтар килә башлаясаҡ.*



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ЯҢЫ ҠАҒИҘӘЛӘР

**Рәсәйҙә кредитҡа ҡағылышлы яңы закон ҡабул ителде. "Кулланыусылар кредиты (займы) тураһында"ғы ("О потребительском кредите (займе)" Закон ағымдағы йылдың 1 июленән үҙ көсөнә инде.**

Закон ҡулланыусыларҙы яҡлау маҡсатында булдырылған. Уға ярашлы, кредит алыу тураһындағы килешеүҙәрҙән бәләкәй шрифт менән яҙылған барлыҡ пункттар һәм шәхси шарттар алып ташлана. Хәҙер займ алыу схемаһы граждандар өсөн күпкә аңлайышлы һәм асыҡ буласаҡ. 1 июлдән банктар өсөн займ биреүҙең барлыҡ шарттары ла яҙылған берҙәм бланктар булдырылды. Кредит биреү учреждениелары займ алыусынан килешеүгә шунда уҡ ҡул ҡуйыуҙы талап итә алмай. Быны өсөн кәмендә 5 көн ваҡыт бирелергә тейеш. Шулай уҡ үҙ көсөнә ингән законға ярашлы, кредит алыусы, банкты алдан иҫкәртмәйенсә, 14 көн эсендә займды кире ҡайтарырға хоҡуҡлы. Был осраҡта ул ошо көндәр өсөн генә процент түләргә бурыслы. Әгәр ҙә кредит маҡсатлы булһа, кире ҡайтарыу өсөн 30 көн ваҡыт бирелә.

Яңы закондың тағы бер үҙенсәлеге банктың займ алыусыға шылтыратыуҙар һәм смс-хәбәрҙәр ебәреү тәртибенә ҡағыла. Әгәр ҙә әлегә тиклем банк хеҙмәткәрҙәре ял, байрам көндәренә, көндөң ниндәй ваҡыты булыуға ҡарамаҫтан, кешене борсоһа, яңы законға ярашлы улар эш көндәрендә киске ундан иртәнге һигеҙгә, ә байрамдарҙа (ялдарҙа) киске һигеҙҙән иртәнге туғыҙға тиклем шылтыратырға (смс-хәбәр ебәрергә) тейеш түгел.

# АБОНЕНТ ТЕЛӘҺӘ ГЕНӘ...

**Көн һайын кәрәҙле телефонға тиҫтәләгән смс-хәбәрҙәр ҡабул итәбеҙ. Уларҙың ҡайһы берәүҙәре мөһим һәм урынлы булһа, күптәре ниндәйҙер хеҙмәттәр күрһәтеү хаҡында реклама, күләмәстәр. Шулай уҡ смс-хәбәр аша тиҙ һәм "осһоҙ" аҡса бирергә вәғәҙә итеүҙәр ҙә йыш күренеш.**

Асыуға тейгән был хәбәрҙәрҙән ҡотолоу мөмкинлеге юҡ кеүек ине, ләкин ошо көндәрҙә Рәсәй Президенты смс-спамға ҡаршы йүнәлтелгән законға ҡул ҡуйҙы. Төҙәтмәләр "Бәйләнеш тураһында"ғы Федераль Законға индерелә.

Закон абонентты үҙе ҡабул итергә ризалыҡ бирмәгән ҡыҫҡа текст хәбәрҙәренән яҡлауға йүнәлтелгән. Документҡа ярашлы, бындай смс-хәбәрҙәр абонент менән алдан килешеү нигеҙендә генә ебәрелергә мөмкин. Шулай уҡ кәрәҙле телефон операторҙары үҙҙәренең селтәре аша законға ярашһыҙ булған мәғлүмәттәрҙе ебәреүҙе туҡтатырға бурыслы. Документ Дәүләт Думаһы тарафынан - 2, ә Совет Федерацияһында 9 июлдә хупланған.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҠАСАҠТАРҘЫ ҠАБУЛ ИТӘСӘКБЕҘ

**Башҡортостан Республикаһы Украинанан 5 мең мәжбүри ҡасаҡты ҡабул итәсәк. Әлеге ваҡытта Рәсәйҙә 150 мең ҡасаҡ иҫәпләнә. Уларҙың күпселеге Ростов, Белгород, Воронеж өлкәләрендә. Был төбәктәрҙең ҡасаҡтар проблемаһын үҙҙәре генә хәл итә алмауынан сығып, Рәсәй Хөкүмәте уларҙы илдең башҡа төбәктәренә таратыу тураһында ҡарар ҡабул итте. Тиҙҙән, рәсләнгән квотаға ярашлы, Башҡортостанға күпләп ҡасаҡтар килә башлаясаҡ.**

Республика башлығы Рөстәм Хәмитов ошо мәсьәлә буйынса район-ҡала етәкселәре менән үткәргән селектор кәңәшмәһендә мәжбүри күсенеүселәргә йәшәү урыны менән тәьмин итеүҙән тыш, уларға эш биреү мөмкинлеген дә хәл итергә ҡушты. Ҡасаҡтарҙы ҡабул итеү, урынлаштырыу һәм социаль адаптация эшен координациялау БР Хөкүмәтенең вице-премьеры Лилиә Ғүмәрова етәкләгән дөйөм республика штабына йөкмәтелгән. Урындарҙа ла шундай штабтар ойоштоноласаҡ һәм уларға киң вәкәләттәр бирелгән яуаплы хеҙмәткәрҙәр билдәләнәсәк. Район һәм ҡала хакимиәттәре башлыҡтарына көн һайын хәл-торошто тикшереү бурысы йөкмәтелгән. Күҙалланыуынса, һәр муниципаль берәмектә 50-150 ҡасаҡ урынлаштырыласаҡ.

# УЙЫНДАРҘЫ КЕМ ҮТКӘРЕР?

**Июль һуңында Швейцарияның Лозанна ҡалаһында Башҡортостан делегацияһы 2021 йылда үтәсәк XI Бөтөн донъя уйындарын үткәреү хоҡуғына эйә булыу өсөн үҙенең ғаризаһын презентацияланы. Унда Өфөнән башҡа Перуның баш ҡалаһы Лима һәм Американың Алабама штатындағы Бирмингем ҡалаһы ла үҙҙәренең ғаризаларын тәҡдим итте.**

Ҡағыҙҙа булараҡ, презентацияла Башҡортостан һәм Өфө ҡалаһы, уның спорт ҡоролмалары һәм ҡала инфраструктураһы һүрәтләнә. Өҫтәмә рәүешендә Рәсәй һәм Башҡортостан Хөкүмәттәренең гарантия хаттары, схемалар, карталар бирелә.

Бөтә донъя уйындары - Олимпия уйындары программаһына инмәгән 30 спорт төрө буйынса уҙғарыла. Уның үҙенең маҡсаты ла бар, сөнки ҡайһы бер спорт төрҙәре - ҡатын-ҡыҙҙарҙың ауыр атлетикаһы, пляж волейболы, триатлон, бадминтон, тхэквондо тап ошо Уйындар аша Олимпия уйындары исемлегенә инеп киткән дә инде.

IX Бөтөн донъя уйындары былтыр июль-августа Колумбияның Кали ҡалаһында үтһә, сираттағыһы 2017 йылда Польшаның Вроцлав ҡалаһында йәйгеһен уҙғарыласаҡ.

XI Бөтөн донъя уйындары 2021 йылдың июль-августына планлаштырылған һәм ул 11 көн дауамында барасаҡ. Иң инандырылыҡ ғариза ҡалдырған һәм быйыл көҙгөһөн IWGA-ның тикшереүен үткән, 2015 йылдың ғинуарында иң сағыу презентация тәҡдим иткән ҡалала йөҙҙән ашыу илдән 4 мең спортсы йыйыласаҡ.

Уйындарҙы үткәреү өсөн Өфө ҡалаһы һайланһа, саралар "Динамо", "Биатлон", "Өфө-Арена" спорт комплекстарында, Спорт һарайында, шулай уҡ "Первушино" аэродромында, "Нефтсе" бассейны һәм стадионында, "Аҡбуҙат" ипподромында уҙғарыласаҡ. Бынан тыш, баш ҡалаға тағы ла биш яңы объект: 2 мең тамашасыға иҫәпләнгән уйын залы, 600 тамашасыны һыйҙырған гимнастика залы, 800 кешегә иҫәпләнгән берго-бер алыш (единоборство) үҙәге, 2 мең урынлыҡ пляж спорты төрҙәре стадионы һәм еңел атлетика манежы төҙөргә кәрәк буласаҡ.

# АҒАСТАР ЯҢЫРТЫЛА

**Нимә икән, тип аптырамағыҙ. Ошо осор эсендә Өфө урмандарында һәм урамдарында 40 йәшкә еткән ҡарт ағастар йәш ағастар менән алмаштырылған. Бында эш шундай принцип буйынса тормошҡа ашырыла: бер ағас урынына - икәүҙе ултыртырға!**

Алты айҙа утыҙ мең самаһы ағас һәм ҡыуаҡ ултыртыуҙы иҫәпкә алғанда, йыл һуңына тиклем был һан ике тапҡырға артырға тейеш.

Үкенескә күрә, бик йыш ҡала халҡы был эшкә ҡаршы сыға, үҙҙәрен ошо өлкәлә белгес тип һанап, ысын белгестәрҙең эшенә аяҡ сала. Әммә белгестәр уҙған быуаттың 70-80-се йылдарында ултыртылған ағастар алмаштырыуға мохтаж, тип раҫлай. Улар быны үҙ мәнфәғәте йәки ҡала властарына унайлы булған өсөн эшләмәй. Сөнки бындай ағастар йыш ҡына кеше ғүмерен өҙөүгә йәки ниндәйҙер милеккә зыян килтереүгә сәбәп булып тора. Мәҫәлән, 6 июнда Коммунистик урамында автомобиль өҫтөнә ҡарт ағастан ботаҡ һынып төштө. Бәхеткә күрә, зыян ҙур булмай. Әммә хәл-тороштоң икенсе һөҙөмтәгә килтереү мөмкинлеген дә инҡар итеп булмай. Шуға ла муниципалитет ҡала халҡына ағастарҙы алмаштырыу эшенә аңлап ҡарауҙы һорай. Был эштең мөһимлеген баһалау зарур.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# АЛҒАМЫ? АРТҠАМЫ?

**РФ Президенты Владимир Путин ҡабул иткән законға ярашлы, Рәсәй 26 октябрҙән ҡышҡы ваҡыт буйынса йәшәй башлаясаҡ - күпселек төбәктәрҙә төнгө икелә сәғәт телдәре бер сәғәткә артҡа күсереләсәк.**

Иҫегеҙҙә булһа, ҡышҡы һәм йәйге ваҡытҡа күсеүҙән 2011 йылдың йәйендә баш тартҡайныҡ. Әммә ошо йылдар эсендә граждандарҙың фекере үҙгәргән - былтыр йыл һуңында уҙғарылған һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусыларҙың ни бары 32 проценты ғына сәғәт күсереүҙән баш тартыуҙы хуплаған. Быйыл 9 июлдә иһә Федерация Советы бер тауыштан тигәндәй "ҡышҡы ваҡыт"ҡа кире күсеү тураһындағы закон өсөн тауыш биргән.

Яңы ҡабул ителгән законға ярашлы, 26 октябрҙә сәғәт уҡтарын күсергәндән һуң, аҙаҡ улар алға йә артҡа күсерелмәйәсәк. Бында Мәскәү ваҡыты төп ваҡыт булып һаналасаҡ. Йәғни урындағы ваҡытты йәки сәғәт зоналарын билдәләгәндә Мәскәү ваҡытынан сығып иҫәп алып барыласаҡ. Ә Мәскәү ваҡыты үҙе дәүләт ваҡыт шкалаһында өсөнсө сәғәт поясына ярашлы +3 тип алына. Барлыҡ сәғәт поястары, элекке кеүек, Хөкүмәт ҡарары менән түгел, закон менән билдәләнә.

Законға ярашлы, Рәсәйҙә сәғәт зоналары 9-ҙан 11-гә тиклем арттырыла. Яңы өсөнсө сәғәт зонаһы барлыҡҡа килә, уға Удмуртстан менән Һамар өлкәһе инәсәк. Был сәғәт поясында ваҡыт Мәскәү ваҡытынан бер сәғәткә алдараҡ барасаҡ. Кемерово өлкәһендә ваҡыт Мәскәү ваҡытынан 4 сәғәткә алдараҡ буласаҡ (6-сы сәғәт зонаһы), ә элекке кеүек өс түгел. Тимәк, Кемерово өлкәһендә, законға ярашлы, сәғәт уҡтарын бер сәғәткә артҡа күсермәйәсәктәр. 11-се сәғәт зонаһына Камчатка крайы һәм Чукотка автономиялы округы инә (Мәскәү ваҡыты +9 сәғәт). Был ваҡытта Камчатка менән Мәскәү араһында 8 сәғәт айырма. Шуны ла билдәләп китергә кәрәк, Чукотка автономиялы округы менән Камчатка крайы йәйге ваҡытта ҡалыуға өлгәште.

Башҡортостан хәҙер дүртенсе сәғәт зонаһына инәсәк (Мәскәү ваҡытына +2 сәғәт).

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔"Башҡорт энциклопедияһы" ғилми-нәшриәт комплексында "Башҡортостан халыҡтары" китабы баҫылып сыҡты. Унда республикала йәшәүсе халыҡтарҙың этногенезы, этник тарихы, теле, йолалары, республика территорияһына күсеп килеп ултырыуы тураһындағы мәғлүмәттәр тупланған. Баҫмала иллюстрация материалдары ла урын алған.

✔27 августан 4 сентябргә тиклем республика районларында һәм ҡалаларында "Баланды спортҡа алып кил" тигән социаль проекттар фестивалдәре үтәсәк. Фестиваль 7 сентябрҙә Өфөлә Ленин майҙанында ҙур спорт байрамы менән тамамланасаҡ. Бында төрлө спорт уйындарынан, ярыштарҙан тыш, спорт төрҙәре буйынса консультациялар алырға, балаларҙы спорт секцияларына яҙҙырырға мөмкин буласаҡ. Ошонда уҡ ГТО нормаһын тапшырыу буйынса майҙан да ойоштороласаҡ.

✔Виртуоз ҡубыҙсы Миңлеғәфүр Зәйнетдинов Германияла үтәсәк халыҡ-ара форумда ҡатнашасаҡ. 7-10 августа ундағы Тауха ҡалаһында Халыҡ-ара йәһүд арфаһы VIII съезд-фестивале ойоштороласаҡ. Сарала ҡубыҙҙа, варганда, хомусҡа һәм ошондай музыка ҡоралының башҡа төрҙәрендә уйнаусылар сығыш яһаясаҡ. М. Зәйнетдинов быйыл апрель айында Мәскәүҙә үткән Халыҡ-ара варгансылар фестивалендә уңышлы сығыш яһағайны һәм әлеге фестивалгә саҡырыу алғайны. Германияла үтәсәк фестивалгә Рәсәйҙән шулай уҡ Яҡутстан хомуссылары һәм Тываның өҙләүселәре барасаҡ.

✔Башҡорт дәүләт педагогия университетында "Педагог - студент - бала" берлектәге ижади күргәҙмә эшләй башланы. Унда художество-графика факультеты студенттары һәм педагогтары етәкселегендә балалар тарафынан аткарылған эштәр ҡуйылған. Был факультетта һәләтле балалар менән эшләүсе лабораториялар булдырылған, унда шөғөлләнеүселәр график дизайн, төрлө материалдарҙы эшкәртеү нигеҙҙәрен үҙләштерә. Был лабораторияларға был юлы 28 августан 15 сентябргә тиклем яҙылып буласаҡ. Тулыраҡ мәғлүмәтте (347) 272-67-46 телефоны аша ала алаһығыҙ.

✔БР Үҙәк һайлау комиссияһы Башҡортостан Президентлығына кандидат булып теркәлеүселәрҙең килемдәре һәм мөлкәте тураһындағы мәғлүмәтте баҫып сығарҙы. Илдар Бикбаев былтыр 1 млн 533 мең 964,92 һум, Юнир Ҡотлоғужин - 2 млн 815 мең 872,39 һум, Рөстәм Хәмитов - 6 млн 28 мең 165,83 һум, Иван Сухарев 8 млн 674 мең 649,94 һум аҡса эшләгән.

✓ *Ә юғары уҡыу йортон тамамлағандан һуң нефтебаза директоры, нефть һурҙырыу һәм компрессор станцияһында баш инженер, төрлө магистралдәр менән идара итеү етәксеһенә тиклем үрләргә мөмкин.*



*ЙӘШТӘР ҠОРО*

**Илдең нефть һәм энергетика комплексы ойошмалары өсөн юғары квалификациялы белгестәр әҙерләп сығарыусы Өфө яғыулыҡ-энергетика колледжы республикала киң билдәле урта профессиональ белем биреү учреждениеһы. Бынан ун бер йыл элек Өфө энергетика колледжын һәм Өфө нефть техникумын берләштереүҙән барлыҡҡа килгән уҡыу йортонда бөгөн өс меңдән ашыу студент белем ала. Колледжда уҡыуҙың отошло яҡтары, уҡытылған һөнәрҙәрҙең өҫтөнлөгө тураһында колледждың 2-се курс студенттары Урал КУСКИЛДИН, Әҙилә МАНАПОВА, Булат ДӘҮЛӘТОВ һәм Илгиз ЮНЫСОВ һөйләй.**

# ИҢ КАМИЛ ӨЛГӨГӘ...

## етеп булмағанда ла, ынтылырға кәрәк



**➔ Был уҡыу йорто хаҡында ҡайҙан ишетеп белдегеҙ? Әле үҙләштергән һөнәрегеҙ һеҙгә киләсәктә хеҙмәт баҙарында үҙ урынығыҙҙы табырға ярҙам итеренә ышанаһығыҙмы?**

**Урал Кускилдин:** Мин Өфө ҡалаһында тыуып үҫтем. Колледжға уҡырға килергә миңә атай-әсәйем кәңәш итте. Әлеге ваҡытта "Электр станциялары. Селтәрҙәр һәм системалар" һөнәрен үҙләштерәм. Хәҙер Рәсәйҙә лә, сит илдә лә энергетика - йылдам үҫешкән өлкәләрҙең береһе. Унда эшләү өсөн һәр ваҡыт яҡшы белгестәр кәрәк. Ә колледж нәҡ ошо йүнәлештә һәйбәт, төплө белем бирә.

Эйе, хәҙер эш урыны таба алмай йөрөгән йәш белгестәр күп. Үҙемде был хәл урап үтер, тип ышанам, сөнки производствоның бер тармағы ла энергетиктарһыҙ эшләй алмай. Ғөмүмән, сәнәғәттең иң үҫешкән һәм перспективалы тармаҡтарының береһе булған энергетикала белгестәр етешмәй. Шуға күрә техник-электрик һөнәренә эйә булыуым миңә хеҙмәт баҙарында үҙ урынымды табырыма ышаныс бирә.

**Илгиз Юнысов:** Салауат районы Арҡауыл ауылынан ошонда уҡ белем алған ағайымдың кәңәше буйынса уҡырға килдем. Энергетика комплексы ил иҡтисадының күп тармаҡтарын үҫтереүҙә нигеҙ булып тора. Ул шулай уҡ нефть һәм башҡа өлкәләрҙең уңышлы эшен дә тәьмин итеүсе. Шуға күрә энергетика тармағының яҡшы эшләүе тотош ил өсөн кәрәк. Ә уның уңышлы эшмәкәрлеген үҙ эшен яҡшы белгән белгестәр тәьмин итә. Шуға улар рәтен тулыландырыу маҡсатында Урал кеүек үк энергетика йүнәлешен һайланым һәм киләсәктә үҙемдең һөнәрем буйынса күңелемә ятҡан эш урыны мотлаҡ табасаҡмын, тип уйлайым. Эшләү менән бер рәттән, юғары уҡыу йортонда уҡырға ла иҫәп тотам.

**Әҙилә Манапова:** Бөрйән районы Яңы Собханғол ауылы ҡыҙымын. Тәүҙә мин колледждың Баймаҡ ҡалаһындағы филиалы тураһында белдем һәм шунда уҡырға барырға иҫәп тоттом. Ләкин Өфөлә йәшәүсе ағайым баш ҡалаға уҡырға килергә өндәне. Имтихандарҙы уңышлы тапшырып, "Газ һәм нефть үткәргестәрен һәм газ һәм нефть һаҡлағыстарын төҙөү һәм файҙаланыу" һөнәренә уҡый башланым. Республиканың һәм Рәсәйҙең нефть һәм газ секторы оҙаҡ йылдар формалаша һәм ул, энергетика менән бер рәттән, илдең иҡтисади һәм ижтимағи яҡтан үҫешенә булышлыҡ итә. Беҙҙең ил был ер аҫты байлыҡтарының ҙур запасына эйә. Шуға киләсәктә лә был өлкәлә эшләү өсөн күп белгестәр талап ителәсәк. Мин, мәҫәлән, уҡып бөткәс, технологик насос машинисы, АЗС операторы, резервуар паркы операторы, ГРС операторы һәм башҡа күп йүнәлештә эшләй аласаҡмын. Ә юғары уҡыу йортон тамамлағандан һуң нефтебаза директоры, нефть һурҙырыу һәм компрессор станцияһында баш инженер, төрлө магистралдәр менән идара итеү етәксеһенә тиклем үрләргә мөмкин.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

*ҺОРАУ - ЯУАП*

## ЭШ БУЙЫНСА ШЫЛТЫРАТҠАНДА...

**Курьер булып эшләйем. Миңә йыш ҡына кәрәҙле телефондан эш буйынса шылтыратырға тура килә. Эш биреүсе был шылтыратыуҙар өсөн түләргә тейешме?**

- Шәхси телефондан эш буйынса шылтыратыуҙар эш биреүсенең рөхсәте менән башҡарылған осраҡта ғына компенсациялана. Түләүҙәрҙең күләме һәм тәртибе эш биреүсе һәм хеҙмәткәр араһындағы килешеүҙә билдәләнә.

Ҡайһы бер ойошмаларҙа эш буйынса шылтыратҡан өсөн аҡсалата компенсация ғына түгел, ә шәхси телефондың амортизацияһы өсөн дә түләү ҡаралған. Был шулай уҡ яҙма килешеүҙә билдәләнгән була. Әгәр ҙә эш биреүсе бындай шылтыратыуҙарға үҙ рөхсәтен бирмәгән булһа, унан һөйләшеүҙәр өсөн аҡса талап итә алмайһығыҙ. Шуға күрә барыһын да алдан һөйләшеп, яҙма килешеүҙә билдәләп ҡуйыу аңлашылмаусанлыҡтарға юл ҡуймаҫ.

## БАҠСАМДА ЭЛЕКТР БАҒАНАҺЫ

**Ауылда шәхси милкемдә булған ер биләмәһендә электр уты үткән 2 бағана тора. Иң ҡыҙығы шунда, өйөмә электр уты ул бағаналарҙан түгел, ә ҡойманан ситтә урынлашҡан бағаналарҙан килә. Биләмәмдәге бағаналар баҡса эштәре менән булған ваҡытта ныҡ ҡамасаулай. Уларҙы икенсе урынға күсереүҙе талап итергә хоҡуғым бармы һәм был осраҡта кемгә мөрәжәғәт итергә?**

- Тәү сиратта урындағы хакимиәттән бағаналарҙың кем милкендә булыуын белергә кәрәк. Ғәҙәттә, бындай бағаналар район (ҡала) электр станцияһы (компанияһы) милкендә була. Ошолай булған осраҡта бағаналарҙы икенсе урынға күсереүҙәрен талап итеп, электр станцияһына яҙма ғариза бирегеҙ. Әгәр ҙә улар быны бер ай эсендә эшләмәһә, ер биләмәгеҙ менән ҡулланыуҙа ҡаршылыҡтарҙы бөтөрөүҙе талап итеп, судҡа мөрәжәғәт итегеҙ. Әйткәндәй, электр бағаналарын күсереү өсөн сығымдарҙы уларҙың милексеһе ҡаплай (РФ Граждандыҡ кодексының 304, 305-се статьялары).

## ХАТА ЯҘЫУ БУЛҺА...

**Миңә 54 йәш. Әлеге ваҡытта эшләмәйем, мәшғүллек үҙәгендә иҫәптә торам. Хаҡлы ялға сығыу өсөн документтар йыя башлағайным, хеҙмәт кенәгәмдә атайымдың исеме яңылыш яҙылғанлығы асыҡланды. "Салихьяновна" урынына "Салихяновна" тип яҙылған. Был хата пенсия юллауҙа ҡатмарлыҡтар тыуҙырырға мөмкинме?**

- Ысынлап та, был осраҡта ҡатмарлыҡтар килеп тыуасаҡ. Ләкин пенсия фонды хеҙмәткәрҙәре һеҙҙең икенсе документтарҙа дөрөҫ итеп яҙылған яҙмаларҙы иҫәпкә алырға мөмкин. Ундай документтар исемлегенә тыуыу тураһында таныҡлыҡ, мәктәпте тамамлау тураһында аттестат, уҡыу йортон тамамлау тураһында диплом, никахҡа инеү тураһында таныҡлыҡ, балаларҙың тыуыу тураһындағы таныҡлыҡтары инә.

Пенсия фондының комиссия ултырышында бөтә документтар ҙа ҡарала һәм уларҙы ҡабул итеү-итмәү тураһында ҡарар сығарыла. Күпселек осраҡта Пенсия фонды хеҙмәткәрҙәре үҙ өҫтәренә яуаплылыҡ алмай һәм ситләтелгән документтарҙы ҡабул итеүгә кире яуап бирәсәк. Был осраҡта судҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк. Ғәҙәттә, суд пенсионер яҡлы була һәм ситләтелгән документтарҙы ҡабул итеү тураһында ҡарар сығара.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Бронхит

❖ 15 грамм алоэ һуты, 100 грамм ҡаҙ майы, 100 грамм аҡ май, 100 грамм бал. Ҡатнашмаға 50 грамм какао өҫтәргә була. Көнөнә 2 тапҡыр 1 стакан ҡайнар һөткә 1 ҡалаҡ ошо ҡатнашманы һалып эсергә.

❖ 1:1 күләмендә керән менән балды бутап, көнөнә 2 тапҡыр - иртән һәм кисен 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Ҡара торманы йыуып, турарға, бал өҫтәп, ултыртып ҡуйырға. Һәр ярты сәғәт һайын бүленеп сыҡҡан һутты 3-әр ҡалаҡ эсергә. Оҙайлы йүтәлде яҡшы дауалай.

❖ 25 грамм йүкә сәскәһе, 10 грамм гөлйемеш, 20 грамм юл япрағы үләне, 10 грамм үгәй инә үләне, 5 грамм аҡ сәскә. 4 балғалаҡ үлән ҡатнашмаһына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 10 минут төнәтергә һәм тәм өсөн бал йәки шәкәр өҫтәргә. Көнөнә 3 тапҡыр стакандың өстән бер өлөшө күләмендә эсергә.

❖ Бал менән зәйтүн майын ҡушып (1:1), көнөнә бер нисә тапҡыр 1-әр балғалаҡ ашарға.

### Йоҡоһоҙлоҡ

❖ 1 стакан ҡайнар һөткә йәки һыуға 1 ҡалаҡ бал өҫтәп, йоҡлар алдынан эсеп ятырға.

### Фалиж

❖ 2 грамм прополисҡа 100 грамм спирт өҫтәп, 3 көн төнәтергә. Көнөнә 2 тапҡыр ашағандан һуң 1,5-2 сәғәт ваҡыт үткәс, 8-әр тамсы ҡабул итергә. Диабет, мигрень, стенокардия ваҡытында көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 15-20 минут алда шәкәргә 25-әр тамсы тамыҙып ҡабул итергә. Дауаланыу курсы - 3-4 ай.

### Юғары ҡан баҫымы

❖ Сөгөлдөр һутын шул уҡ күләмдә бал менән болғатып, көнөнә 4-5 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ ҡабул итергә.

❖ 1 балғалаҡ бал, 1 балғалаҡ имбир һуты, 1 балғалаҡ онталған тмин тәмләткесен бергә болғатып, көнөнә 2 тапҡыр ашарға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# БӘПЕС ТУЙЫ

**Бала тыуыу - шатлыҡлы ваҡиға булған. Ғөмүмән, күп бала тәрбиәләгән әсә йәмғиәттә иң абруйлы һәм хөрмәтле кеше иҫәпләнгән. Баланың сәләмәтлеген ул тыуғанда уҡ хәстәрләгәндәр. Ауырлы ҡатын теләгән нәмәһен ашарға тейеш булған, югиһә был баланың һаулығына кире йоғонто яһай, тип иҫәпләгәндәр. Һәр кеше был донъяға үҙ өлөшө менән тыуа тигән ышаныу ҙа көслө булған.**

Бала тыуғас, уны һыйыр майы өҫтәлгән ҡайнаған һыу менән йыуындырғандар, кендеген ҡорот йәки майлы ҡорот, ҡайны берҙә һарыҡтың эс майы менән майлағандар. Кендеген киҫеп, кендек әбейе балаға йүргәк иseме ҡушҡан, иренәнә ҡаймаҡ, ҡатыҡ, май, бал һөрткән һәм шулай тип һамаҡлаған: "Минең кеүек туҡ булһын, ике ҡулың май булһын, ауыҙың тулы бал булһын", "Ошо май кеүек йомшаҡ, бал кеүек тәмле телле бул". Балаға шиғри формала йәмғиәттә ҡабул ителгән әҙәпәхлаҡ ҡағиҙәләре һеңдерелгән. Балаһын имеҙгән саҡта әсә балаға оҙон бәхетле ғүмер теләп, уның йөҙөнә, маңлайына, күҙҙәренә күкрәк һөтө һөрткән. Баланы оҙаҡ - 2-2,5 йәшкә тиклем имеҙгәндәр. Шулай ҙа уны ҙурайғансы имеҙеү хупланмаған да, "әсәһенең ҡанын имә башлай" тигәндәр.

Бала тыуыу менән бәйле йолалар ҡатын бәпәйгә ауырып китҡәс тә башланған. Тулғаҡ сәйенән һуң, бәпес сәйенә йыйылғандар. Ошо уҡ йола кендек сәйе, бәпәй бутҡаһы тип тә йөрөтөлә. Кендек инәһенә бүләктәр, аҡса биргәндәр. Табынға ҡуйылған ризыҡты бар туғандар, күрше-күлән килтергән. "Балалы кешене ашатһаң, сауаплы булаһың", тигәндәр. Шулай уҡ, ни тиклем күп кеше килһә, шул тиклем әсәнең һөтө күп була, тип ышанғандар. Ҡунаҡтар әсәне ҡотлап, тиҙерәк торалышҡан. Олораҡ ҡатындар ҡатнашҡан табын еп сәйе тип атала. Унда сабыйҙың әсәһе йәки өләсәһе тубыҡтан табанға тиклем 10, 33 йәки 40 тапҡыр уратып, алдан әҙерләнгән аҡ еп таратҡан. Аяҡ менән үлсәп бирелгән еп баланың тиҙ атлап китеренә ярҙам итергә тейеш булған.

Балаға 40 көн тулғансы әсә менән бала ике донъя араһында тора, тип иҫәпләгәнгә күрә, был ваҡыт үтеп китеү менән бәпәй туйы уҙғарылған. Балаға исемде, ғәҙәттә, ул тыуғандың 7-се көнөндә ҡушҡандар. Исем туйында яҡын туғандар ҡатнашҡан.

Тәүге тапҡыр баланың сәсен алыу, беренсе теш, беренсе аҙым, беренсе һүҙ ҙә билдәләнә барған. Күп ҡунаҡтар йыйылмаһа ла, ғаиләә эсендә бала ғүмерендәге был этаптарҙы билдәләү йолаһы булған.

Малайҙар өсөн сөннәт туйы ҙурлап үткәрелгән. Сөннәтләү өсөн иң яҡшы ваҡыт итеп 3-6 йәш араһы иҫәпләнгән. Табында сөннәтсе (баба) ҡатнашмаған, әммә уға бүләк итеп аҡсанан тыш, икмәк йәки башҡа ризыҡтар бирелгән. Етеш йәшәгән башҡорттар был ваҡиғаны ҙурыраҡ кимәлдә байрам иткән, бәйге ойошторған. Ҡыҙҙарҙың ҡолағын тишеп, һырға кейҙереү ошо уҡ байрамға оҡшаш мәғәнә белдергән. Һырға - ҡыҙҙың ғүмерендәге яңы этапты белдергән, яуыз көстәрҙән дә һаҡлаған. Тишелгән ҡолаҡ боҙолмаһын өсөн ҡоштар ҡайтҡанда һәм киткәндә, шулай уҡ йорт ҡоштары һуйған мәлдә был йоланы үтәргә ярамаған. Ҡолаҡ боҙола ҡалһа, уларҙы майлап имләп, көмөш һырға кейҙергәндәр.

**Эльза МИҢРАНОВА.**

**"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.**

**(Дауамы бар).**

ЙӘШТӘР ҠОРО

# ИҢ КАМИЛ ӨЛГӨГӘ...

## етеп булмағанда ла, ынтылырға кәрәк

**(Башы 5-се биттә).**

**Булат Дәүләтов:** Баш ҡалала йәшәүсе дуҫтарым кәңәше буйынса Дыуан районы Мәсәғүт ауылынан Өфө ягыулыҡ-энергетика колледжына уҡырға килдем. Мәктәптә уҡығанда уҡ киләсәктә газ һәм нефть өлкәһендә инженер-проектлаусы булырға хыялландым. Шуға күрә маҡсатлы рәүештә "Газ һәм нефть үткәргестәрен һәм газ һәм нефть һаҡлағыстарын төҙөү һәм файҙаланыу" һөнәренә генә документтарымды тапшырып, имтихандар бирҙем һәм уҡырға индем. Нефть һәм газды табып эшкәрткәндән һуң уларҙы ҡулланыусыға алып барып еткерергә кәрәк. Ошо ике звеноны үткәргес торба һалыу транспорты бәйләй. Бөгөнгө көндә газ һәм нефть продукттары ҡулланылмаған тармаҡты табыуы ауыр. Ә алға киткән транспорт системаһы булмай тороп, нефть һәм газ сәнәғәтенең үҫешен күҙ алдына килтереп булмай. Әлеге ваҡытта Рәсәйҙә магистраль үткәргес торбаларҙың оҙонлоғо 225 мең километрҙан артып китте. Бөгөн дә төрлө йүнәлештә үткәргес торбалар һалыу дауам итә. Мәҫәлән улар иҫәбенә "Рәсәй - Төркиә" газ үткәреү магистрален, "Ямал - Европа" газ транспорт системаһын, "Көнсығыш Себер - Тымыҡ Океан" нефть үткәргес торбаларын индерергә була. Әйтелгәндәрҙән сығып күҙаллағанда, колледждан һуң минә эш урыны табыуы ауыр булмаясаҡ.

➔ **Ҡайһы бер йәштәрҙең колледж, техникумдарҙы һанға һуғып бармауын, улар өсөн тик юғары уҡыу йорттары ғына абруйлы һаналыуын беләбеҙ. Ә быға һеҙгә колледжда уҡыу нимә бирә?**

**Әдилә Манапова:** Минеңсә, барыбер ҙә тәүҙә урта профессиональ уҡыу йортонда уҡып сығыу яҡшыраҡ, сөнки бында практик яҡҡа ҙур иғтибар бирелә. Колледжда үҙләштергән һөнәрҙең бар эстәлеген тәрән итеп өйрәнеп, производствола эшләү өсөн әҙер белгес булып сығаһың. Һәр кеше, минеңсә, ниндәйҙер эшсе һөнәренә эйә булырға тейеш. Мәҫәлән, кыҙҙар ашнаҡсы, тегенсе, сәс ҡырҡыусы һәм башҡа һөнәрҙәрҙе үҙләштерергә мөмкин. Егеттәргә лә тормош юлында һәр саҡ кәрәк буласаҡ һөнәр исемлеге ҙур. Хәҙерге ваҡытта хеҙмәт баҙарында нәҡ эшсе һөнәрҙәргә эйә белгестәргә ҡытлыҡ, ә йәштәр әле булһын юрист, иҡтисадсы булырға тырыша.

**Булат Дәүләтов:** Колледж һөнәрҙең нигеҙен бирә. Ә юғары уҡыу йортонда уны тәрәнәйтеп өйрәнергә һәм белемде камиллаштырырға була. Йәмғиәттә әле булһа совет заманынан ҡалған "Училище, техникумдар икегә уҡығандар өсөн генә", тигән иҫке ҡараш йәшәй. Ләкин бөгөнгө көн ысынбарлығы быныҢ төптө хата икәнен иҫбат итә. Урта профессиональ уҡыу йортон тамамлаған белгестәр хатта көрсөк ваҡытында ла эшһеҙ ҡалмай.

**Илгиз Юнысов:** Хәҙерге көндә ҡайһы бер колледждар, шулай уҡ техникум, училищелар, юғары уҡыу йорто менән етди конкуренция алып барырға мөмкин. БыныҢ өсөн, мәҫәлән, беҙҙең колледжда барыһы ла бар - уҡыу өсөн дә, йәшәү өсөн дә яҡшы шарттар булдырылған. Уҡытыу программаһы эш биреүселәрҙең талабына яраҡлаштырып төҙөлгән. Үҙ һөнәрҙәрен яратҡан һәм үҙ эшенең профессионалдары булған уҡытыусылар белем бирә. Колледждың матди-техник базаһы яңы, ул заманса ҡорамалдар менән йыһазландырылған. Спорт менән шөғөлләнергә теләүселәр өсөн 5 спорт залы эшләй. Шуға күрә колледжға уҡырға килеүемә һис үкенмәйем һәм тырышып белем тауына үрләйем.

➔ **Һеҙҙеңсә, замана йәштәре ниндәй булырға тейеш?**

**Урал Кускилдин:** Йәш кеше, тәү сиратта, рухлы булырға тейеш. Үҙеңдең туған телеңде, халҡыңдың йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен һәм тарихын яҡшы белеү йәш кешенең абруйын ғына күтәрә. Спорт менән дуҫ булыу, сәләмәт тормош алып барыу ҙа мотлаҡ, тип һанайым. Замана йәштәренең белемгә ынтылышы көслө булырға тейеш, сөнки киләсәк белемлеләр ҡулында. Һөнәреңде кәрәк булған һәр ваҡыт атай-әсәй ҡушҡан өсөн түгел, ә үҙең теләп, дәртләнеп, яратып үҙләштереү мөһим.

**Әдилә Манапова:** Бөгөнгө көндә кеше, шул иҫәптән йәштәр ҙә, конкуренцияға һәләтле булырға тейеш. Ә быныҢ өсөн Урал һанап үткән сифаттарҙан тыш, тағы ла насар ғәҙәттәрҙән ары тороу, үҙ-үҙеңде төрлө яҡлап үстереү мөһим. Шулай уҡ ҡыйыулыҡ, тәүәккәллек, үҙ алдыңа аныҡ маҡсаттар ҡуя белеү һәм шуға ынтылыу ҙа йәштәргә заман һынауҙары алдында юғалып ҡалмаҫҡа булышлыҡ итә.

**Булат Дәүләтов:** Тәү сиратта, кеше рухи һәм әхлаҡи яҡтан үҫешкән булырға тейеш. Шулай уҡ замана йәштәрҙең белемле һәм мәҙәниәтле булыуын талап итә. Тағы ла әҙәплелек, намыҫ, үҙ-үҙеңде һәм башҡаларҙы хөрмәт итә белеү, тәртип кеүек сифаттарҙың да юғары баһаланғанлығын онотоға ярамай.

**Илгиз Юнысов:** Йәштәштәремде аңлы, шәфҡәтле, һау, үҙенең тыуған ерен һәм халҡын яратыусы, уҡымышлы, ижади ҡарашлы, аралашыусан һәм эшлекле итеп күрәм.

➔ **Кешегә уңышлы булырға ниндәй сифаттары ярҙам итә тип уйлайһығыҙ?**

**Булат Дәүләтов:** Маҡсатҡа ынтылышлы булыу.

**Илгиз Юнысов:** Үҙаллылыҡ һәм бойондороҡһоҙлоҡ. Шулай уҡ үҙеңдең көсөңә һәм хыялдарыңдың тормошҡа ашасағына ышаныу мөһим. Һәр ваҡыт үҙеңде камиллаштырыу өҫтөндә эшләү юғары үрҙәр яуларға булышлыҡ итә, минеңсә. Иң камил өлгөгә етеп булмай, тип һанала, ләкин был, уға ынтылырға ярамай, тигәнде аңлатмай, шуға күрә һәр ваҡыт ошо йүнәлештә эшләргә кәрәк.

**Әдилә Манапова:** Белемле һәм мәҙәниәтле булған кеше һәр саҡ уңышҡа өлгәшә. Ныҡышмалылыҡ, интеллектуаллек, командала эшләй белеү һәм эшһөйәрлек шулай уҡ даланға илтә.

**Урал Кускилдин:** Ваҡытты дөрөҫ бүлә белеү бик мөһим. Күптәр бөтә нәмәгә һәм хәҙер уҡ өлгәшергә теләп, ныҡ янылыша. Ниндәйҙер өлкәлә уңыш яулау өсөн уға табан яйлап, әммә ышаныслы аҙымдар менән барырға кәрәк. Шулай уҡ кешенең тышҡы ҡиәфәте лә, үҙен тотошо ла, ғәҙәттәре лә уңыш ҡаҙанырға ярҙам итә.

➔ **Һәр ваҡытта ла рух, туған телеңде, тарихыңды белеү кеүек сифаттар ихтирамға лайыҡ булған...**

**Булат Дәүләтов:** Һис шикһеҙ, һәр кем үҙенең телен, мәҙәниәтен, тарихын белергә тейеш. Баланың тел туған телендә асылырға тейеш. Был - бәхәсһеҙ. Ләкин йәмғиәттә тик туған телдә генә аралашып булмай. Урыҫса ғына аралашҡан кешеләр араһында ошо телдә һөйләшергә кәрәк. "Мин тик үҙемдең туған телемдә генә һөйләшәм", тип йөрөп булмай бит. Урынына, йыйылған кешеләргә ҡарап, ниндәй телдә һөйләшергә кәрәк икәнлеген һайлау дөрөҫтөр, тип уйлайым. Был туған телгә ҡарата ихтирамһыҙ ҡараш тигәнде аңлатмай, ә бары тик шул ваҡыттағы шарттарға яраҡлашыу хаҡында ғына һөйләй.

**Әдилә Манапова:** Туған телебеҙҙә халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәте, йәшәү рәүеше, аҡылы һәм тәжрибәһе, күңел матурлығы сағыла. Тимәк, башҡорт телен белмәү - ул халҡыңды, үҙеңдең булмышыңды аңламау, тигән һүҙ. Шулай уҡ балала рух тәрбиәләү - ғаиләләге тәрбиәнең бер өлөшө. Бер кешегә генә ҡарап та уның ғаиләһендә ошо йәһәттән ниндәйҙер тәрбиә бирелгәнлеге күренеп тора. Шуға күрә балала кесе йәштән үҙ иле, халҡы менән ғорурланыу тойғоһон тәрбиәләү мөһим.

**Урал Кускилдин:** Туған телен, тарихын, шәжәрәһен белмәгән кеше үҙен белемле һәм мәҙәниәтле тип әйтә алмай, минеңсә. Әлләнисә сит тел белеп тә, үҙ телеңдә һөйләшә белмәйһең икән (йәки теләмәйһең икән), тирә-йүндәгеләрҙең ихтирамынан мәхрүм буласаҡһың. Нәҡ туған тел ярҙамында бала саҡта беҙ донъя тураһында тәүге тәьҫораттар алабыҙ, тормошто аңлабыҙ.

**Илгиз Юнысов:** Һәр кешенең тыуған иле, тарихы, мәҙәниәте, туған теле була. Үҙеңдең тарихыңды белеү тормошто ҡыҙыҡлы, мәғәнәле итә. Ә туған телен һәр кеше камил белергә тейеш, сөнки туған тел - халыҡтың иң ҙур хазинаһы. Тел - халыҡтың хәтере һәм уның рухи ҡеүәте. Өйҙә беҙ тик башҡорт телендә аралашабыҙ. Киләсәктә балаларым менән дә мотлаҡ туған телебеҙҙә аралашасаҡмын. Был - быуындан-быуынға күсеп килеүсе матур ҡағиҙә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Илгә һәр ваҡыт төплө белемле, дөрөҫ ҡарар ҡабул итә белгән йәштәр кәрәк. Йәш быуындың әүҙемлегенән, уларҙың шәхси һәм профессиональ сифаттарынан, эшһөйәрлектәренән ниндәйҙер айырым ойошманы ғына түгел, ә тотош илде ышаныслы киләсәк көтә. Бөгөнгө түңәрәк өҫтәлдә ҡатнашҡан уңған һәм аҡыллы йәштәребеҙҙең дә үҙ илдәренең лайыҡлы граждандары буласағына шик юҡ.**

**Гөлназ САФУАНОВА**

**яҙып алды.**

✓ Себер юлынан да, Нуғай юлынан да Ҡараһаҡалға башҡорттар ағыла. Тамъяндан Сырымбәт 500 кешеһе менән Рәз йылғаһы буйында, ә ҡатай старшинаһы Артыҡай Ишкинин ғәскәре менән Ҡыҙыл йылғаһы буйында Ҡараһаҡалды көтә.



ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

**Нуғай юлындағы көнбайыш ҡатайҙар башҡорт халҡы тарихында һиҙелерлек эҙ ҡалдырған. Бигерәк тә был XVII - XVIII быуаттарҙа башҡорт яуҙары ваҡиғаларында асыҡ сағыла. Был мәҡәләмдә башҡорт халҡының артабанғы йәшәйешенә ҙур йоғонто яһаған 1735 - 1740 йылдарҙағы яуҙың һуңғы осоро - 1740 йыл миҫалында башҡорт ихтилалдарында ҡатайҙарҙың ҡатнашыуын асыҡларға теләнем.**

# ҠАТАЙҘАР ҠАРАҺАҠАЛ ЯУЫНДА



### 1740 йыл. Яу барышы

Ҡараһаҡал яуы тип билдәләнгән хәрәкәт 1740 йылда Себер юлында башлана. Йыл башында хан тип иғлан ителгән Ҡараһаҡал яуҙы "тоғро" башҡорт һәм мишәр старшиналарына һөжүмдән башлай. "Тоғролар" Көҙәш Рахманғолов, Мәндәр Арҡаев, Шағанай Борсаҡов һәм башҡа баш күтәреүселәр менән бер ни ҙә эшләй алмайҙар. Тәржемәсе Роман Уразалин тарафынан ебәрелгән хәбәрҙәрҙә "уның менән бергә булған "вернайҙар"ҙың күбеһе өйҙәренә таралып бөттө (Шағанай Борсаҡовтан башҡалары), байтағы "бурҙарға" ҡушылдылар, "бурҙар" сәғәтләп арталар", тип билдәләнә.

Башҡорт эштәре буйынса комиссия начальнигы генерал-майор Соймонов баш күтәреүселәргә ҡаршы ҙур көс ташлай. Көнсығыштан полковник Арсеньев, подполковник Павлуцкий, Красноуфимскиҙан подполковник Путятин, Табындан капитан Кублицкий походҡа сыға. Соймонов үҙе лә Минзәләнән Өфөгә килә. Март айында ҙур юғалтыуҙар кисергән баш күтәреүселәр тауҙарға табан сигенә. Күренекле яу етәксеһе Аланейәнғол Ҡотлоғужиндың әсиргә төшөүе лә эшкә аяҡ сала. Себер юлында хәрәкәт һүнә төшә. "Тоғро" старшина Көҙәш Рахманғолов подполковник Путятинға Ҡараһаҡалдың Нуғай юлына китеүен хәбәр итә. Аҙаҡ Ҡараһаҡал Тамъян, Ҡоҙғон-Ҡатай, Күбәләк, Тиләү улыстары башҡорттары менән уларға өсөнсө һөжүмде ойоштора. Был һуғышта Булат Йәлекәевтың 90 кешеһе үлә, 28-е яралана, 254 ат ҡулға төшә, 36 ат яралана. Уларға ярҙамға килгән Көҙәш Рахманғолов отряды һөжүме лә кире ҡағыла. Был ваҡытта Ҡараһаҡал лагеры Ағиҙел йылғаһына яҡын Буғанаҡ йылғаһы буйында, Көҫәш ауылында була (1-се киҫәк, 402-се бит). Аҙаҡ, Яйыҡ йылғаһы буйындағы һуғыштан һуң, капитан Кублицкийға килеп әләккән "баш бурҙың" береһе, ошо Көҫәш ауылы кешеһе Әбделмән Көҫәпов Ҡараһаҡалдың үҙ йортонда тороуон таный. Был ауыл элекке Белорет-Инйәр тар тимер юлының "Ҡадыш" станцияһы тирәһендә булғандыр. Ҡараһаҡал бында алдан һөйләгән хәбәрҙәрен дөрөҫләй - уның һикһән меңлек ғәскәре бар, ул тиҙҙән был яҡтарға килеп етәсәк.

Ошо осорҙа капитан Кублицкий баш күтәреүселәргә, "дөрөҫ юлға баҫырға" өндәп, указ ебәрә. Ҡараһаҡалға - ул Ҡатай улысына килгәнгә тиклем булһа кәрәк - ошо улыс старшинаһы Теләүкәй Булаттимеров килеп китә. Ҡараһаҡалға ул тәүҙә ышанмай, башҡорт ҡанын бушҡа ҡойоуҙа ғәйепләй, әммә Ҡараһаҡал уны ышандырыуға өлгәшә. Алдар Иҫәнгилдин улы Морат хәбәренән хан уға кенәз дәрәжәһе биреүен, хөрмәт йөҙөнән атын бүләк итеүен белергә була (шундай уҡ дәрәжәне Дыуан улысынан Салтан да ала. Теләүкәй ошонан һуң бөтә Ҡатай улысын күтәрә алған, күрәһең. Икенсе бер ҡатай Күсекәй Ҡолсорин (алда иҫкә алынған яу етәксеһе) да, үҙ кешеләре менән килеп, Ҡараһаҡалдан "Ҡайҙа вәғәҙә иткән ғәскәрең?" тип талап итә. "Әгәр күрһәтмәйһең икән, урыҫтарға тотоп бирәм", тип янай. Баяғы Морат һүҙҙәренән аңлашылыуынса, Теләүкәй Ҡараһаҡалға Кәлсер, Дыуан улыстарына барып, "тоғролар" отрядтарын тар-мар итергә кәңәш бирә. Әммә Ҡараһаҡал Мауыҙҙы күле буйына китә. Бында уны Яныш бай һыйындырған булырға тейеш. Ҡатай ерендә Ҡараһаҡал ғәскәре мең ярым кешегә етә. Капитан Кублицкий 366 кешелек ғәскәре менән майҙың икенсе ун көнлөгөндә Табынскийҙан яңынан Ҡатай еренә йүнәлә. Кәлсер-Табын улысында ул 200-ләп кешенән торған баш күтәреүселәр отрядын ҡыуып етә, уларҙы илле саҡрымлап ҡыуып бара. Баш күтәреүселәрҙең күбеһе ҡоралдарын ташлап ҡасты, тип маҡтана ул. Был отряд "тоғролар" ауылдарын туҙҙырырға килгән була. Етәкселәре ҡатайҙан Теләүкәй Булаттимеров, сотник Ҡоҙашман Тәкәев, Дыуан улысынан Салтан Арыҫланбәков, ҡатайҙан тағы ла Йәнебәк була. 10 май көндө 250 кешелек Теләүкәй, Салтан, Ҡоҙашман ғәскәре "тоғро" башҡорт Йәрембәт Боҫҡонов ауылына һөжүм итеп, 200 һумлыҡ мал, башҡа кәрәк-яраҡтар, 70 һумлыҡ иген тартып алалар, ауылды туҙҙыралар. Капитан Кублицкий менән ошонда уларҙың икенсе һуғышы була, баш күтәреүселәр яңынан тарала. Ҡараһаҡал был ваҡытта "тоғро" Байым тарханға һөжүм итә, унан Ҡарағас тауҙарына йүнәлә. Шул тауҙан ул Роман Уразалин ғәскәренә һөжүм итергә ниәтләй, тик уларҙың меңдән ашыу икәнен күреп, кире Ҡарағас тауына китә. Май айында Ҡараһаҡалдың Ҡатай улысынан китеүен Теләүкәй менән Ҡоҙашман уның үҙ ғәскәренә китеүе менән аңлата. Ул, йәнәһе, ете көндән килеп етәсәк, әгәр ҙә килеп етмәһә, көтмәҫкә ҡушҡан.

Ҡараһаҡал янына төрлө яҡтан башҡорттар ағыла (тотолған әсирҙәр өс меңләп ғәскәр тураһында һөйләй). Кублицкий, Павлуцкий командалары баш күтәреүселәргә ҡаршы әүҙем һуғыш хәрәкәттәре башлай. Был тирәлә хәрәкәт итеүсе 7059 кешелек ғәскәр туплана, уға өҫтәп, 11312 кешелек хәрби командалар төрлө ҡалаҡәлғәләрҙә туплана, быларға "тоғро" башҡорт, мишәр старшиналары отрядтарын да өҫтәргә кәрәк. Капитан Кублицкий ҡатайҙың "баш буры" Теләүкәй көстәренә майҙың 22-ләрендә һөжүм итеп, бөтәһе лә ыңғай булһа, аҙаҡ Ҡараһаҡал артынан китәсәкмен, тип хәбәр итә. 500-ләп "тоғро" башҡорттарҙы Ағиҙел аръяғына ебәрә. Отряд Ҡарағас тауы янында бик күп йыйылған башҡорттар менән һуғышҡа инә. Был һуғышта "бурҙар"ҙың 200-ләп кешеһе үлә, 6 кеше әсиргә эләгә. Әммә Ҡараһаҡал унда булмай сыға. 22 май көндө Кублицкий үҙе Тайыр (Таһир) ауылына өс саҡрым алыҫлыҡта өс йөҙ башҡорт менән алышҡа инә (20 башҡорт үлә, 2-һе яралана, 1-әү әсиргә эләгә). Был Тайыр ауылы аҙаҡ Аҡкөсөк-Сермән булып киткән. Ауыл элек 1773-1775 йылдарҙағы һуғышта яу етәксеһе Аҡкөсөк Таировтың атаһы исеме менән йөрөп, аҙаҡ Аҡкөсөктөң үҙ исеме менән атала башлай, XVIII быуат аҙағындағы рәүиздә генә ауыл Сермән тип яҙыла.

Себер юлынан да, Нуғай юлынан да Ҡараһаҡалға башҡорттар ағыла. Мәҫәлән, Тамъяндан Сырымбәт 500 кешеһе менән Рәз йылғаһы буйында, ә ҡатай старшинаһы Артыҡай Ишкинин ғәскәре менән Ҡыҙыл йылғаһы буйында Ҡараһаҡалды көтә. 25 майҙа тотолған бер башҡорт "Ҡараһаҡалға Ҡатай, Тамъян, Ҡыуаҡан, Тиләү, Күбәләк, Әйле, Ҡаратаулы, Тырнаҡлы, Ҡара Табын - бөтәһе туғыҙ улыс башҡорттары, 2000 йә 3000 кеше булалыр, ҡушылдылар, улар Яйыҡҡа ҡарай йүнәлделәр, үҙҙәре менән тирмәләр ҙә алғандар, уйҙары - шунда йәйләргә", ти. Улар артынан Павлуцкий капитан Сытинды ебәрә. Сытин улар менән һуғышҡа инә, утыҙлап кешене үлтерә. Павлуцкий үҙе лә башҡорттар артынан йүнәлә, уларҙан бер генә көн артта ҡалып, эҙәрлекләй. "Бурҙар" Ырымбур яғына китә алмаһындар өсөн капитан Тарбеевҡа командаһы менән ярҙамға килеп етергә хәбәр ебәрә. Ҡыҙыл йылғаһы буйында Павлуцкий һәм уның артынан килеп еткән Языков командалары Ҡараһаҡал ғәскәренә һөжүм итә, баш күтәреүселәр 400-ләп кешеһен юғалта. Был һуғыштан һуң Тамъян, Ҡатай, Көҙәй, Тиләү, Күбәләк һәм башҡа улыстарҙан меңләп ғаилә Ҡараһаҡалдан айырыла, кире тауҙарға ҡаса. Был майҙың егермеләрендә була. 23 майҙа Павлуцкий, Языков командалары Ҡараһаҡалға Яйыҡ янында һөжүм итә, йылға аша сығып өлгөрмәгән йөҙ илле кеше үлтерелә, командалар мең ярым кешенең ҡалғандарын эҙәрлекләп китә, уларға ярҙамға Кублицкий ҙа килеп етә.

Һуңғы алыш Тубыл йылғаһында була. Яраланған Ҡараһаҡал ғәскәр ҡалдыҡтары менән ҡаҙаҡ далаларына ҡаса. Ҡараһаҡалдан хат алғас, Ҡатай улысынан Теләүкәй менән Ҡусҡар бай (Аҡкусҡар), Әйле улысынан Сарҡа бай ауылдары менән уның артынан китергә ниәтләй. Хат килтергән кеше, Ҡараһаҡал Сыбаркүлдән биш көнлөк юлда тора, тип анлата. Ләкин был ниәт тормошҡа ашмай, башҡорттар Ҡараһаҡалдың ҡаҙаҡтар тарафынан үлтерелеүе тураһында хәбәр ишетә. Уларға кире тауҙарға ҡасырға ғына ҡала...

**Ринат ШӘЙБӘКОВ,**
**Белорет районы Зөйәк урта мәктәбенең тарих уҡытыусыһы.**
**(Аҙағы. Башы 29-30-сы һандарҙа).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

## БАШҠОРТТАР

## Торлаҡ һәм ҡаралтылар

Башҡорттарҙың мунсаһы бик ябай. Ҡайһы бер урындарҙа улар ваҡытлыса ғына эшләнгән, йәйгелеккә таҡта аласыҡ төҙөп, уның эсенә мейес сығарып, өҫтөнә таш өйәләр. Яҡкас, таҡта аласыҡ кейеҙ менән ҡаплана һәм унда берәмләп йыуыналар. Ҡайһы берҙә мунса самандан һалына йәки ситәндән үрелә. Әммә йышыраҡ буранан күтәрелә. Ғәҙәттә, ул ҙур булмай - 4 квадрат метр, бура матур итеп мүкләнмәй. Уға иҙән түшәлмәй, ә түбәһенә таҡта ябыла һәм өҫтөнә тупраҡ һалына. Тәҙрәләре юҡ, ишеге шул тиклем бәләкәй, унан эйелеп кенә инергә мөмкин. Мунса эсендә турайып баҫып булмай. Ишеккә ҡаршы тәпәш урындыҡ эшләнә, ә ишек эргәһендә өҫтөнә таштар өйөлгән мейес сығарыла. Ишек алдына ситәндән йәки ҡамыштан ышыҡ эшләнә, йәйгеһен шунда сисенеп-кейенәләр, сөнки мунса алды юҡ. Бөтөн ерҙә лә шундай бер типтағы ҡара мунса осрай. Әлбиттә, матур итеп һалынған, таҡта иҙәнле һәм таҡта түбәле, алты мөйөшлө мунсалар ҙа бар.

Мунсаға үҙ тастары һәм көндәлек тәһәрәт алған ҡомғандары менән йөрөйҙәр. Башҡорттар сабынырға яратмай, мунсала бары тик йыуыналар ғына. Ирҙәр - айырым, ҡатын-ҡыҙ айырым йыуына, иң һуңынан бала-саға бара. Мунса урамдың артҡы өлөшөндә йәки күл, йылға ярында төҙөлә.

Башҡортостан картаһына күҙ һалыу менән беҙ шуға инанабыҙ: башҡорт ауылдарының күпселеге йылға йәки күл буйҙарында урынлашҡан. Шуға күрә, урамдарҙа ла, ауылда ла бер генә урында ла ҡоҙоҡтар осраманы. Мин ҡоҙоҡтарҙы Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында, һаҙлыҡ ерҙә урынлашҡан боронғо ауылдарҙа ла бик һирәк кенә күрҙем. Һаҙлыҡ эргәһендә ауылдар булыуы аңлатма талап итә. Был ауылдар элек бында йәйләүсе башҡорттарҙың ҡышлау урыны булған. Ҡышлау урынын һайлағанда һыуҙың күплегенә иғтибар итмәгәндәр, сөнки ҡышын ҡар уларға һыу сығанағы ла булып торған, ә көтөүлектәге үләндең ҡуйылығы буйынса һайлағандар. Малдар шулай итеп ҡышҡы 4-5 айҙа ла тибендә йөрөгән.

Ауыл өсөн урын һайлағанда һыу сығанағының яҡынлығынан бигерәк ерҙең ҡоро булыуы төп урында торған. Тауҙарҙа текә битләүҙәрҙән ситтәрәк, йылға йәки шишмә тирәһенә өҫтөнлөк биргәндәр. Көньяҡ һәм Урта Уралдың көнбайыш армыттарында, ҡырластарҙа ауылға нигеҙҙе эске йылға үҙәндәрендә һайлағандар.

Дөйөм алғанда башҡорт ауылдары тырым-тырағай ултыра. Шул уҡ ваҡытта уларҙа дөрөҫ һәм киң урамдар бар. Ҡайһы бер ҙур ауылдарҙа бер нисә ҙур урам һәм бер-нисә бәләкәй урам йәки тыҡрыҡ иҫәпләнә. Ауылда кеше һаны артыу менән унан йорт хужаларының бер өлөшө айырылып, ауылдың икенсе осона барып төпләнә. Был ауылдар айырылып сыҡҡан ауылдың исемен алып, уларға Бәләкәй, Үрге, Түбәнге, Яңы, Икенсе, Өсөнсө һ.б. атамалары өҫтәлә.

✓ *Профессор Напил Базылхан Башҡортостан архивтарында булғандан һуң, иҫе китеп: "Күп төрки телле халыҡтарҙың тамғаларын тикшерҙем, ә башҡорт халҡы ҡулланған тамғаларҙың күбеһе Орхон-Йәнәсәй яҙмаларында осрай", - тигәйне.*



**Бөгөн көнсығыш телдәрен, көнсығыш дәүләттәренең һәм халыҡтарының иҡтисади, сәйәси, мәҙәни үҙенсәлектәрен яҡшы белгән белгестәр хеҙмәт баҙарында юғары баһалана. Ошондай шарттарҙа шәрҡиәтселек йүнәлешендә белем алыуҙың әһәмиәте тағы ла арта төшкән кеүек. Бөгөнгө ҡунаҡтарыбыҙ - филология фәндәре кандидаты, БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетының Шәрҡиәт кафедраһы мөдире, доцент Ғәйнислам ИБРАҺИМОВ һәм Төркиәнең Ушак университеты доценты Морат ОЗШАХИН менән көнсығыш телдәре менән бер рәттән башҡорт теленең дә донъя кимәлендәге урыны, уның тарихы сығанаҡтары тураһында әңгәмәләшәбеҙ.**

# ТУҒАН ТЕЛДЕҢ

## шул телдә һөйләшкән

**▸ Сит телде, бигерәк тә көнсығыш телдәрен өйрәнеү фонетик системаны өйрәнеүгә генә ҡайтып ҡалмай, бының өсөн һин шул халыҡтар кеүек фекерләргә өйрәнергә лә тейешһең, тиҙәр. Шәрҡиәтселек кафедраһы эшмәкәрлегенең төп бурысы нимәнән ғибәрәт?**

**Ғ. ИБРАҺИМОВ:** Был кафедра филология һәм журналистика факультетында 2008 йылда асылғайны, 2010 йылдан студенттарға "Шәрҡиәтселек һәм африканистика" йүнәлеше буйынса белем бирәбеҙ. Төрөк, ғәрәп, фарсы һәм ҡытай телдәрен генә түгел, был халыҡтарҙың әҙәбиәтен, мәҙәниәтен, тарихын комплекслы өйрәнеү өсөн мөмкинлектәребеҙ барлыҡҡа килде, сит илдәрҙең вуздары менән килешеүҙәр төҙөп, уҡытыусылар саҡырыу ҙа телдәр өйрәнеүгә булышлыҡ итә. Кафедраның уҡытыу программаһы сит ил вуздары программаһына ярашлы төҙөлгәнгә күрә, һәр студент ситтә уҡып ҡайта һәм ике вуздың да дипломына эйә була ала. Тиҙҙән Башҡорт дәүләт университетының 30 студентын Ҡытайға бер йыллыҡ курсҡа, шулай уҡ бер-нисә студентты Төркиәгә ике айға тел өйрәнеү курстарына ебәрәбеҙ. Йәштәр өсөн бындай тәжрибә телде шымартыу, сит милләттең мәҙәниәте менән яҡындан танышыу йәһәтенән бик әһәмиәтле. Фарсы һәм ғәрәп телендә һөйләшкән илдәрҙең юғары уҡыу йорттары менән ошо уҡ йүнәлештә эш башлау өсөн һөйләшеүҙәр алып барабыҙ. Киләсәктә шәрҡиәтселек кафедраһында бакалавр дипломы алыусы студенттарға магистратураны диңгеҙ аръяғында дауам итергә мөмкинлек асырға торабыҙ. Морат бей Озшахин, мәҫәлән, беҙҙең вуздың Төркиәләге кураторы буласаҡ.

**М. ОЗШАХИН:** Мин Башҡортостанға өс йылға уҡытырға килгәйнем, әммә Төркиәлә минең урыныма уҡытыусы таба алмауҙары сәбәпле, ҡайтырға тура килә. Шуға ла кураторлыҡ вазифаһын шатланып ҡабул итәм. Ушак, Станбул, Эгей, Юнус Эмре университеттары һәм БДУ араһында төҙөлгән килешеүҙәр нигеҙендә был юғары уҡыу йорттарында башҡорт телен уҡытыуҙы көйләү, студенттарҙы кәрәкле дәреслектәр менән тәьмин итеү бурысы йөкмәтелде миңә.

**Ғ. ИБРАҺИМОВ:** Бөгөн Башҡортостанда бөтөн юғары уҡыу йорттары буйынса башҡорт теле фәнен уҡырға теләүселәрҙең иҫәбе 300-гә тулмаған ваҡытта Төркиәнең Ушак университетында ғына 300-ҙән ашыу кеше башҡорт телен өйрәнә. Шуға ла был илдә башҡорт телен уҡытыу бер йүнәлештә барһын өсөн беҙҙең яҡтан ярҙам мотлаҡ булырға тейеш. Был йәһәттән боҙ ҡуҙғалды, тиһәк тә була, июнь айында вице-премьер Илшат Тажетдинов, мәғариф министры Әлфис Ғаязов һәм БДУ ректоры Николай Морозкин юғары уҡыу йортондағы эшлекле осрашыуҙа башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса әсбаптар һәм методик ҡулланмаларҙы, уларҙы әҙерләүҙе Шәрҡиәт кафедраһы ағзалары ярҙамында атҡарып, Төркиәләге башҡорт телен өйрәнеүсе уҡыусыларға ярҙам итеү маҡсатын ҡуйҙы. Бының өсөн беҙ етәкселәребеҙгә рәхмәтлебеҙ, был бурысты беҙ мотлаҡ үтәп сығырға тейешбеҙ. Сағыштырыу өсөн генә әйтәм: төрөк телен, төрөк мәҙәниәтен өйрәнеүсе илдәрҙе уҡытыусылар, китаптар, методик белешмәләр менән Төркиә үҙе тәьмин итә.

**▸ Был йүнәлештә юғары белем алған белгестәр үҙ һөнәре буйынса эш таба аламы? Башҡортостанда, мәҫәлән, улар ниндәй өлкәләрҙә эшләй ала?**



**Ғ. ИБРАҺИМОВ:** Шәрҡиәтселек элек-электән башҡорттар араһында киң таралған йүнәлеш. Әхмәтзәки Вәлиди, Абдулҡадир Инан, Ғәлимйән Тағандарҙы ғына иҫкә алайыҡ, улар мәҙрәсәлә ғәрәп, фарсы, иҫке төрки телдәрен яҡшы өйрәнгән, бер үк ваҡытта рус, Европа телдәрен дә үҙләштергәндәр. Донъялар буталып, был шәхестәребеҙ сит илгә сығып китергә мәжбүр булһа ла, береһе лә юғалып ҡалмаған. Мәҙрәсәлә алған белемдәрен артабан камиллаштырып, бөтөн донъяла билдәлелек яулағандар. Бөгөнгө көндә лә был ғалимдарҙың хеҙмәттәре юғары баһаға лайыҡ, донъя тарихсылары, тел белгестәре уларҙың хеҙмәттәренә таяна. Шулай булғас, ниңә беҙҙең балалар көнсығыш телдәрен өйрәнмәҫкә тейеш? Быйылдан башлап ҡытай телен уҡыта башланыҡ. Студенттар иң күп халыҡ һөйләшкән телдәрҙең береһен өйрәнеп, отасаҡ ҡына. Ҡытай менән Рәсәй дәүләте араһында бәйләнештәр нығына барыуын иҫәпкә алғанда, ҡытай теле белгестәре ҙур һорау менән файҙаланасаҡ. Шул уҡ туризм өлкәһен генә алайыҡ, сит милләт кешеләренә Башҡортостан, башҡорт халҡының тарихы, рухи ҡомартҡылары, билдәле шәхестәре тураһында тулы мәғлүмәт еткерә алырлыҡ гидтар, экскурсия етәкселәре кәрәк булған осраҡта, беҙҙең студенттар өсөн эш табыуы ауырлыҡ тыуҙырмаясаҡ. Тағы ла бик мөһим бер нәмә бар: архивтарҙа иҫке төрки телендә яҙылған һәм әле өйрәнелмәгән күп материалдар һаҡлана. Уларҙы уҡып, халыҡҡа еткерер өсөн беренсе сиратта иҫке төрки телен уҡый белгән, хәреф таныуҙан бигерәк, был телде аңлаған кешеләр кәрәк. Студенттарыбыҙ фарсы, ғәрәп, төрөк телдәрен ныҡлап өйрәнә, шуға ла улар тарихи архивтарҙа, һирәк ҡулъяҙмалар фондында, ғилми-тикшеренеү институттарында эшләй аласаҡ. Уҡыу программаһында инглиз телен өйрәнеү ҙә ҡаралған, был иһә министрлыҡтарҙа сит илдәр менән бәйләнештәр бүлектәрендә, сит илдәрҙең шәхси фирмаларына эшкә урынлашырға мөмкинлек бирә.

**М. ОЗШАХИН:** Был кафедра эшмәкәрлегенең һөҙөмтәһен киләсәктә күрәсәкбеҙ, тип уйлайым, уның аша Башҡортостан көнсығыш илдәрендә танылыу яулаясаҡ. Төркиәлә, мәҫәлән, башҡорт һәм татар телдәрен иҡтисад өлкәһендә эшләргә теләүселәр өйрәнә. Үҙҙәренең тамырҙарын өйрәнеүҙе күҙаллап, ғалим булыу маҡсатын эҙәрлекләгәндәр ҙә бар. Уҡыу йортонда 2012 йылдан ҡытай телен иҡтисадҡа бәйләп уҡыта башланыҡ, башҡорт телен дә иҡтисади бәйләнештәр булдырыу өсөн өйрәтһәк, бик шәп булыр ине. Бындай бәйләнештәр өсөн башҡорт илен, территорияһын, тарихын, мәҙәниәтен, телен белгән кешеләр бик кәрәк буласаҡ.

**Ғ. ИБРАҺИМОВ:** Ғөмүмән, Төркиәлә телдәрҙе өйрәнеү бик яҡшы ҡуйылған. Мин тел, тарих һәм география факультетында уҡыным. Ул факультетта бөтәһе иллегә яҡын бүлек бар ине. Бөгөнгө көндә иһә, ундағы төрки телдәр кафедраһында 30-лап төрки теле уҡытыла, уларҙан тыш, рус, болгар, венгр, немец, инглиз, француз теле һәм әҙәбиәттәрен, хатта үле телдәрҙе лә өйрәтәләр. Мәҫәлән, унда бик боронғо булған һәм бөгөнгө көндә бер кем дә һөйләшмәгән шумер теле уҡытыла. Бүлектәрҙә студенттар һаны күп түгел, төркөмдә 5-6 студент булыуы ғәҙәти күренеш. Беҙҙә, бындай бүлекте перспективаһыҙ һанап, күптән ябып ҡуйырҙар ине.

**▸ Морат бей, һеҙ башҡорт телен ниндәй маҡсат менән өйрәнәһегеҙ? Башҡорт теленең боронғолоғон тойоп өлгөрҙөгөҙмө әле?**

**М. ОЗШАХИН:** Мин Төркиәнең Измир ҡалаһында урынлашҡан Эгей университетында белем алдым. Профессор Мостафа Өнәр башҡорт теле лексикологияһының байлығы тураһында һөйләгәйне, миндә лә уға ҡарата ҙур ҡыҙыҡһыныу уянды. Телде үҙаллы, тәржемәләр эшләп өйрәнә башланым, һөйләшеп өйрәнеү өсөн дуҫтарым менән үҙ-ара башҡорт телендә аралашырға тырыша инек. Ошо уҡ Эгей университетында магистр һәм кандидатлыҡ диссертацияларын башҡорт теленең лексикологияһы буйынса яҡланым. Был хеҙмәт 3300 биттән торҙо, уның сиктәрендә барлығы 64 тема билдәләнде. Башҡорт теленең ни тиклем бай булғанына бөгөн дә һоҡланып бөтә алмайым. Төрөк теле менән сағыштырғанда, ҡылымдар ғына ла 10 меңгә артыҡ. Мәҫәлән, аттың ҡолағын ҡыбырлатыуын аңлатҡан ғына әллә нисәмә һүҙ бар. Башҡорт халҡының тәбиғәт менән тығыҙ бәйләнештә һәм, иң мөһиме, уның менән гармонияла йәшәгәнлеге телегеҙҙә тулыһынса сағыла.

Башҡорт теле көнбайыш менән көнсығышты тоташтырып торған күпер кеүек. Ул ике яҡтың да лексик байлығын үҙендә туплай алған һәм был байлыҡты бик оҫта файҙалана. Мәҫәлән, башҡорт телендә ғәрәп теленән ингән 2500 һүҙ бар, уларҙың ҡайһы берҙәрен үҙләштергән, ҡайһы берҙәренә яңы мәғәнәләр өҫтәп, киңәйткән. Төрөк телендә күптән дөйөм ҡулланылыштан төшөп ҡалған һүҙҙәр башҡорт теленең актив һүҙлек составында йөрөй. Башҡорт теле буйынса ғилми-тикшеренеү эштәренә килгәндә, уның өйрәнелмәгән өлөштәре бихисап. Мәҫәлән, башҡорт телендә төҫтәр билдәләнеше, туғанлыҡ терминдары, уртаҡ һүҙҙәр өлкәһендә тарихи бәйләнештәр тикшерелмәгән. Көрән, көрәнһыу төҫтәрен билдәләүсе айырым һүҙҙәр төрөк телендә юҡ. Башҡорт һәм монгол телдәре араһында бәйләнештәр бар, быны, әйтәйек, "ажғырбожғор" һүҙе раҫлай, әммә был тема ентекле өйрәнелмәгән әле.

**Ғ. ИБРАҺИМОВ:** Тарихи яҡтан ҡарағанда, башҡорт теле ысынлап та бик боронғо сығанаҡтарға тоташа. Ҡайһы бер диалекттарҙа "ҙ", "һ", "ҫ" өндәрен ҡулланып һөйләшеү ҙә боронғолоҡҡа ишара яһай. Был форенгаль өндәр беҙҙең эраға тиклем IV-V быуаттарҙағы Һундар дәүләтендә лә булған. Ҡасандыр ярты донъяны үҙ ҡулында тотҡан һундарҙың эҙе тик башҡорт телендә генә ҡалған, уны башҡа телдәрҙә күреп булмай. Әлеге ваҡытта форенгаль өндәр төркмән телендә ҡулланыла, тимәк, телдәре ике тел төркөмөнә ҡараған башҡорт һәм төркмән халыҡтары ҡайһылыр дәүерҙә аралашып йәшәгән.

Башҡорттарҙың урта һөйләшендә "анта", "мынта", "еңкә" тип һөйләшәләр. Был диссимилятив өндәр VI-VII быуаттарға ҡараған боронғо Орхон-Йәнәсәй яҙмаларында ғына бар, улар бүтән төрки телдәрҙә ҡулланылмай. Шулай уҡ, ҡайһы бер ғалимдар фекеренсә, иң башта тамғалар, улар нигеҙендә Орхон-Йәнәсәй яҙмалары барлыҡҡа килгән. Белеүебеҙсә, башҡорт халҡы ла борон-борондан тамғаларҙы файҙаланған. Ырыу тамғаһы, һәр араның үҙ тамғаһы булған. Ике йыл элек Ҡаҙағстандың үҙәк дәүләт музейының ҡулъяҙма һәм музей сығанаҡтарын өйрәнеү үҙәге етәксеһе, профессор Напил Базылхан Башҡортостан архивтарында булғандан һуң, иҫе китеп: "Күп төрки телле халыҡтарҙың тамғаларын тикшерҙем, әммә башҡорт халҡы ҡулланған тамғаларҙың күбеһе Орхон-Йәнәсәй яҙмаларында осрай", - тигәйне. Тимәк, ҡайһылыр бер дәүерҙә башҡорт ҡәүеме дөйөм төрки ҡәбиләләр менән бергә йәшәгән осорҙа шул яҙманы барлыҡҡа килтереүҙә төп роль уйнаған. Был да башҡорт теленең боронғолоғона ишара яһай. Ә бөгөнгө көндә башҡорттар араһында һундарҙың телен өйрәнгән, Орхон-Йәнәсәй яҙмаларын уҡый алған кеше бармы? Беҙ үҙебеҙ хазина өҫтөндә йөрөп тә, шуны эйәләп ала белмәйбеҙ. Тимәк, телебеҙҙең даирәһен белә күреп кәметәбеҙ. Ул ғына ла түгел, диплом эше яҙыусылар йәки башҡа төр ғилми-тикшеренеү эштәре менән булыусылар тоталар ҙа көнбайыш биргән тапалған юл буйынса телдә "концепт", "донъя картинаһы" эҙләй башлай. Айсбергтың ҡояшҡа саҡ ҡына ире-

> ***Тарихи яҡтан ҡарағанда, башҡорт теле ысынлап та бик боронғо сығанаҡтарға тоташа. Ҡайһы бер диалекттарҙа "ҙ", "һ", "ҫ" өндәрен ҡулланып һөйләшеү ҙә боронғолоҡҡа ишара яһай. Был форенгаль өндәр беҙҙең эраға тиклем IV-V быуаттарҙағы Һун дәүләтендә лә булған. Ҡасандыр ярты донъяны үҙ ҡулында тотҡан һундарҙың эҙе тик башҡорт телендә генә ҡалған, уны башҡа телдәрҙә күреп булмай. Әлеге ваҡытта форенгаль өндәр төркмән телендә ҡулланыла, тимәк, телдәре ике тел төркөмөнә ҡараған башҡорт һәм төркмән халыҡтары ҡайһылыр дәүерҙә аралашып йәшәгән.***

**✓ *Инглиздарҙың әҙәби теле Шекспир заманында, XVI быуатта формалашҡан тип иҫәпләнә. Ә төрки телдәренең әҙәби теле барлыҡҡа килеүгә 1300 йыл. Сағыштырып ҡарағыҙ инде, ҡайһы тел байыраҡ һәм ҡайһы телдең киләсәге бар?***

# ЯҘМЫШЫ...

## кешеләр ҡулында

гән тамсыһына телде тығып бутайҙар ҙа, ҡыуанышып тик йөрөйҙәр. Ә уның төбөндә башҡорттоң асылы, боронғолоҡ ята. Төрки телдәр барлыҡҡа килгәндә уларҙы формалаштырыуҙа ата-бабаларыбыҙ ниндәй роль уйнаған икән, тигән уй башыбыҙға ла инеп сыҡмай. Әлбиттә, концепт һәм донъя картинаһы тураһында ла хеҙмәттәр яҙыу кәрәктер, тик был башҡорт теле системаһында ғына түгел, бер нисә телдәр системаһында эшләнһен ине. Мәçәлән, башҡорт һәм инглиз телдәрен сағыштыра икән, белгес был телдәрҙең икеһен дә һыу кеүек эсергә тейеш. Беҙҙең белгестәребеҙ башҡорт телен яҡшы белгән осраҡта ла, инглиз телен тейешле кимәлдә өйрәнмәү һөҙөмтәһендә үҙ хеҙмәтендә тәржемәләр генә ҡуллана.

**М. ОЗШАХИН:** Ысынлап та, башҡорт телен тарихи күҙлектән өйрәнеү етешмәй, тигән фекер менән тулыһынса килешәм. Шул уҡ инглиздарҙың әҙәби теле Уильям Шекспир заманында, XVI быуатта формалашҡан тип иҫәпләнә. Ә төрки телдәренең әҙәби теле барлыҡҡа килеүгә 1300 йыл. Сағыштырып ҡарағыҙ инде, ҡайһы тел байыраҡ һәм ҡайһы телдең киләсәге булырға тейеш?

**Ғ. ИБРАҺИМОВ:** Телдең асылына төшөнөр өсөн башҡа телдәрҙе лә яҡшы өйрәнергә кәрәк. Бөгөнгө көндә башҡорт теленең этимологик һүҙлеге төҙөлгәне юҡ, сөнки уны төҙөгән кеше иçке төрки телен, унда булған ғәрәп-фарсы алынмаларын да яҡшы белергә тейеш. Шунһыҙ был эште атҡарып сығыу мөмкин түгел. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙә был телдәргә әһәмиәт биреүселәр юҡ. Башҡорт һәм рус телдәрен белһәм, шул етә, тип уйлаусылар күп. Бына шуның өсөн дә студенттарыма ҙур өмөттәр бағлайым мин.

**▸ Боронғо аҡыл эйәләренең, тел - ул халыҡ мәҙәниәтенең төп нигеҙе, тигән һүҙҙәре бар. Башҡорт теленең лексикаһын өйрәнеп, башҡорт халҡының тәбиғәт балаһы булыуын яҡшы төçмөрләгәнһегеҙ. Башҡортостанда бер йыл йәшәгәндән һуң бөгөнгө замандаштарыбыҙ тураһында ниндәй фекерҙәһегеҙ?**

**М. ОЗШАХИН:** Хәтергә иң уйылып ҡалғаны - башҡорттарҙың асыҡ күңелле, алсаҡ булыуы. Тик ни эшләптер башҡорт кешеләренең күбеһе рус телендә аралашырға ярата. "Ә мин рус телен насар беләм", тим ундайҙарға, шунан һуң ғына башҡортсаға күсәләр. Мин хатта таксиға инеп ултырғас та водителдән: "Башҡортса беләһеңме?" - тип һорай һалам. Белһәләр, юл буйына башҡортса аралашып барабыҙ. "Һеҙ ҡайһы яҡтан?"- тип һораһалар, "Төркиә башҡорто мин", - тип яуап бирәм. "Унда башҡорттар йәшәйме ни?"- тип аптырайҙар. Ҡайҙа барһаң да: "Башҡорт теле һеҙгә нимәгә кәрәк, уны ни өсөн өйрәнәһегеҙ?"- тигән һорау бирәләр. Йәки: "Төркиәлә кешеләр башҡортса беләме ни?"- тип аптырайҙар. Бындай һорауҙарға ҡаршы мин һәр ваҡыт: "Төркиәлә 78 миллион кеше башҡортса белә", - тип яуаплайым.

Бер ваҡыт Төркиә аэропортында самолеттан килеп төшкән бер ханым төрөк милләтле хеҙмәткәргә инглиз телендә өндәште, әммә тегеһе аңламаны. Шунан русса әйтеп ҡараны, тегеһе тағы аңламаны. Ахыр сиктә: "Әсәйем бында тороп торһа буламы?" - тип, башҡортса өндәшкәйне, теге хеҙмәткәр: "Ярай, торһон", - тип яуап бирҙе. Бына шулай, башҡорт теле бер сит телдән дә кәм түгел, хатта ҡайҙалыр "модалы" инглиз телен дә аңламауҙары, әммә башҡорт теленең күп ишектәрҙе астыра алыуы ихтимал. Тел иң тәү сиратта аңлашыр, аралашыр өсөн кәрәк бит. Төрки халыҡтарының берәүһенең генә телен белеү ҙә һине әллә күпме халыҡҡа яҡын итә.

**Ғ. ИБРАҺИМОВ:** Төркиәлә 90-сы йылдар башында Әхмәтзәки Вәлиди, Абдулҡадир Инанды белһәләр ҙә, уларҙың башҡорт икәнлеген, Башҡортостандың ҡайҙа урынлашыуын белеүселәр бик һирәк ине. Бөйөк башҡорт улдарын үҙ шәхестәре кеүек ҡабул итә торғайнылар. Бөгөнгө көндә хәл үҙгәрҙе. Төркиәлә ана шул улар үҙҙәренеке кеүек ҡабул иткән шәхестәрҙең туған башҡорт теле уҡытылып ҡына ҡалмай, төрөктәр башҡорт теле буйынса ғилми хеҙмәттәр, китаптар яҙа һәм баçтырып сығара. Морат бей киләсәктә башҡорт теленең һүҙлеген төҙөргә әҙерләнә, бер йыл эсендә ул ғилми хеҙмәтенең 600 битен әҙерләне.

**▸ Лексика ни тиклем генә бай булмаһын, бөгөнгө заман кешеһе телмәрендә уның күп өлөшөн ҡулланмай, һөҙөмтәлә, һөйләшеү телебеҙ көндән- көн ярлылана. Хатта яҙыусылар әçәр яҙғанда ҡулланған тел байлығы ла 2 меңләп һүҙҙән артыҡ түгел, тиҙәр. Шулай булғас, лексик тел байлығыбыҙға яйлап юҡҡа сығыу ҡурҡынысы янамаймы?**

**М. ОЗШАХИН:** Был проблема һәр милли әҙәбиәткә ҡағыла. Рус милләтле кешенән һораһаң, улар ҙа, яҙыусыларыбыҙ үҙ әçәрҙәрендә 500-1000 һүҙ ҡуллана, тип әйтәсәк, төрөктәр ҙә шулай яуап бирәсәк. Ләкин был кешеләрҙең проблемаһы, телдең проблемаһы түгел. Шул уҡ Өфөнән 60-70 километр ситкә сығып, ауыл халҡы менән аралаша башлаһаң, башҡорт теленең ни тиклем бай булыуын аңлайһың. Уларҙың телмәре ҡала башҡорттарыныҡына ҡарағанда, һис шикһеҙ, йәнлерәк. Әгәр ҙә кеше үҙ телмәрендә күберәк һүҙҙәр ҡулланырға теләй икән, китап уҡыһын һәм өлкән быуын менән аралашһын. Әммә беҙҙең бар бәләбеҙ китап уҡымауҙа шул.

**Ғ. ИБРАҺИМОВ:** СССР заманында иң күп китап уҡыусы ил булдыҡ. Китаптарҙы китапханаларға йөрөп тә, һатып алып та уҡынылар. Уларҙың хаҡтары ла кеçәгә һуҡмай ине. Хәҙер йәштәр араһында әҙәби әçәр уҡып ултырыусыларҙы осратыуы ҡыйын. Шул уҡымау арҡаһында балаларҙың телмәре ярлылана, фекерләү ҡеүәһе лә түбәнәйә. Мәçәлән, элек башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетына уҡырға инер өсөн абитуриенттар инша яҙа торғайны. Инша баланың фекерләү ҡеүәһен күрһәтә, уның аша белем кимәлен дә төçмөрләргә мөмкин. Ә хәҙер БДИ-ла тест һорауҙарына яуап биреп, уның һөҙөмтәләрен тотоп килә. Тест бит ул уйларға форсат бирмәй.



**М. ОЗШАХИН:** Тағы ла шуны билдәләргә кәрәк: бөтөн телдәрҙә лә техника үçеше менән бергә үҙләштергән һүҙҙәр артыуы күҙәтелә. Сит телдән ингән һүҙҙәр урынына боронғо һүҙҙәрҙе кире ҡайтарып, йәки яңы һүҙ уйлап табып, киң ҡулланылышҡа индергәндә күпкә яҡшыраҡ булыр ине, минеңсә. Миңә 1910 йылда сығарылған "Шура" гәзитен күреү, уҡып ҡарау бәхете тейҙе. Унда "Тел ярышы" тигән рубрика булған. Быға оҡшаш тел ярышын Англияның Оксфорд тел институтында ла ойошторалар икән. Мәçәлән, донъяла киң таралған бер һүҙҙе алалар ҙа, үҙ телендә шуның аналогын табырға кәрәк була. Әйтәйек, телефон камераһына үҙеңде үҙең төшөрөү мәғәнәһен аңлатыусы "селфи" һүҙен табыусы кешегә лауреат исеме бирелде. "Селфи" һүҙенең төрөксәһе "*öz çekim*" формаһында яңғырай. Төрлө опен-эйр, флешмоб кеүек һүҙҙәр урынына башҡортса яңы һүҙ уйлап табыу буйынса яҙыусылар, ғалимдар, журналистар араһында ярыш ойоштороп, ҡулланылышҡа индергә була.

**Ғ. ИБРАҺИМОВ:** Телдең һүҙлек составына яңылыҡ индереү, уны үҙгәртеү буйынса Төркиәнең тәжрибәһе ҙурыраҡ. Мостафа Кемаль Ататөрктөң тел реформалары осоронда XVIII-XIX быуаттарҙа төрөк теленә ингән ғәрәп һәм фарсы алынмаларынан ҡотолоу йәһәтенән XIII-XIX быуат арауығына ҡараған әҙәби мираçтарҙан саф төрөк һүҙҙәрен "һөҙөп" алалар. Шул уҡ ваҡытта, туғандаш төрки телдәрҙең һүҙ байлығына ла ҡарап, башҡорт, татар, ҡаҙаҡ телдәренән һүҙҙәр үҙләштерелә. Улар барыһы ла ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәре урынына ҡулланыла башлай. Ә инде 1929 йылда мәктәптәрҙә дәрестәрҙе ғәрәп телендә уҡытыу тыйылғандан алып, төрөк теленең һүҙлек составы шаҡтай ҙур үҙгәрештәр кисерә. Егерменсе быуаттың 30-сы йылдарына тиклем уның 50-60 процентын ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәре тәшкил итһә, бөгөн яҡынса 90 проценты саф төрөк һүҙҙәренән тора. Ҡалған 10 проценты яңы сыҡҡан техника, технологиялар менән бәйле. Башҡорт телендә лә бындай үҙгәрештәр индерергә булыр ине, тип уйлайым.

**М. ОЗШАХИН:** Бөгөнгө заманда иң бай һаналған инглиз теленең лексикаһы 1 миллион һүҙҙән тора. Инглиз теленең һүҙлек составына ҡала исемдәре, топонимик атамалар, хатта билдәле шәхестәрҙең исемдәре лә индерелгән. Ә беҙ төрөк һәм башҡорт лексикаһын сағыштырып, уртаҡ һүҙҙәрҙе генә йыйһаҡ та, миллиондан ашыу һүҙ килеп сығасаҡ. Минеңсә, башҡорт теле әле лә төрөк теле өсөн сығанаҡ була ала. Мәçәлән, мин Башҡортостан юлдаш каналын ҡарағанда журналистарҙың "һәүәçкәр" һүҙен йыш ҡулланыуын ишеттем. Ә төрөк телендә француз теленән ингән "*amatör*" һүҙе ҡулланыла. Уны башҡорт теленән үҙләштерелгән һүҙ менән алыштырһаҡ, яҡшыраҡ булыр ине. Шулай уҡ "фанатик" һүҙен аңлатҡан "йән атар" һүҙе бар икән. Бынан һуң мин "фанатик" тип яҙмайым, уның урынына башҡорт теленән алынған "йән атар" һүҙен ҡулланасаҡмын. Әйҙә, төрөк теленең һүҙлек составына инһен, уны бит инглиз йәки япон теленән түгел, туғандаш телдән үҙләштерәсәкбеҙ. Тимәк, башҡорт теленең әле Төркиәлә йәшәүсе 78 миллион кешегә һүҙ бирерлек көсө бар, әҙәби әçәрҙәрҙә ул һүҙҙәр ҡулланылмауы ижадсыларҙың ғәйебе.

**▸ Глобалләшеү процестары тел һәм этник идентификация мәсьәләләрен тағы ла киçкенләштереп ебәрҙе кеүек. Был күренеште нисек итеп зыян күрмәйенсә үткәреп ебәрергә була?**

**М. ОЗШАХИН:** Йәштәрҙең үҙ милләтен инҡар итеп йөрөүе диңгеҙ аръяғынан килгән "ҡиммәттәр"ҙең өçтөнлөк алыуынан. Бигерәк тә Америка мәҙәниәте популяр бөгөн. Балалар урыç, инглиз телдәрен белә, ә башҡорт телендә һүҙҙе һүҙгә ялғап та әйтә алмай. Кеçәләге байлығын сығарып ҡуллана белмәй, тип әйтер инем мин улар хаҡында. Был кире йоғонтонан арынып булмай, әммә баçымды бер аҙ кәметер өсөн балаларҙы оло быуын кешеләре менән йышыраҡ аралаштырырға кәрәк. Өләсәй, олатайҙары менән ваҡыттарын бергә үткәрһәләр, улар барыбер ниндәйҙер кимәлдә башҡорт рухлы булып үçәсәк. Глобалләшеү һөҙөмтәһендә башҡорт теле ЮНЕСКО-ның юғалып барыусы телдәр исемлегенә индерелһә лә, уның артабанғы яҙмышы тик башҡорт кешеләренең ҡулында.

**Ғ. ИБРАҺИМОВ:** Баланың башҡортлоғон таныуы тәү сиратта ғаиләләге тәрбиәнән килә, һуңынан йәмғиәт йоғонтоһонан тора, тип иçәпләйем. Әйтәйек, СССР заманында ла милләттәргә баçым аҙ яһалманы. Ләкин ул осорҙа аҡһаҡалдар институты яҡшы эшләп килде. Баланың ата-әсәһе аҡса эшләгән арала уны олатай-өләсәһе тәрбиәләне. Һөҙөмтәлә, хатта урам буйында берәй оло кеше үтеп барһа, йәштәр үҙен тәртипкә килтереп, һаулыҡ һорашып, яҡшы мөғәмәлә күрһәтеп тороп ҡала ине. Хәҙер ололар һәм кеселәр бер-береһен күп осраҡта һанға һуҡмай. Был бер сәбәп булһа, икенсеһе - телевидение һәм интернет йоғонтоһона ҡайтып ҡала. Бөгөнгө замана балаһы 3-4 йәшендә хәреф танымаһа ла, телевизор йәки компьютерҙы нисек ҡабыҙырға, кәрәкле мультфильмды, уйынды ҡайҙан табырға белә. Беҙ бөгөн быға ҡаршы бер нәмә лә эшләй алмайбыҙ, тик башҡортса йәнһүрәттәр төшөрөп, башҡорт әкиәттәре нигеҙендә уйындар уйлап сығарып ҡына, бәлки, хәлде үҙебеҙҙең файҙаға бороп ебәрергә мөмкиндер. Мәçәлән, йәнһүрәттәр төшөрөргә, ҡыҙыҡлы уйындар эшләргә була. Хайуандар, бөжәктәр донъяһын үҙебеҙсә аңлатһаҡ, балаларыбыҙҙы үҙебеҙҙең рухи мираçыбыҙ нигеҙендә тәрбиәләүгә өлгәшер инек, тип иçәпләйем.

***Хәтергә иң уйылып ҡалғаны - башҡорттарҙың асыҡ күңелле, алсаҡ булыуы. Тик ни эшләптер башҡорт кешеләренең күбеһе рус телендә аралашырға ярата. "Ә мин рус телен насар беләм", тим ундайҙарға, шунан һуң ғына башҡортсаға күсәләр. Мин хатта таксиға инеп ултырғас та водителдән: "Башҡортса беләһеңме?" - тип һорай һалам. Белһәләр, юл буйына башҡортса аралашып барабыҙ. "Һеҙ ҡайһы яҡтан?"- тип һораһалар, "Төркиә башҡорто мин", - тип яуап бирәм. "Унда башҡорттар йәшәйме ни?"- тип аптырайҙар.***

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Геродот кеүек боронғо аҡыл эйәләре, һәр халыҡ уны башҡаларҙан айырып тороусы үҙенсәлекле һыҙаттарға эйә, тип яҙып ҡалдырған. Хәҙерге заманда был һыҙаттарҙың сиге юйыла ла төштө, тиҙҙән беҙҙе башҡа милләттәрҙән бары тик телебеҙ генә айырып торасаҡ. Туған телебеҙҙең бер телдән дә кәм булмауын сит ҡитғаларҙа йәшәүсе туғандаш халыҡтар аңлап, телебеҙҙе өйрәнеү эшенә үҙ өлөшөн индерергә тырышҡанда, беҙгә лә ошо ябай ғына хәҡиҡәтте ваҡытында аңлау кәрәктер, моғайын. Шул саҡта ғына милли үҙенсәлектәрҙе һаҡларға, үçтерергә һәм халыҡ булып һаҡланып ҡалырға мөмкин буласаҡ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмә ҡорҙо,**
**Сәриә ҒАРИПОВА**
**яҙып алды.**

***✓ Аҙна буйы барған сарала мин 187-се һан аҫтында теркәлгәйнем, сығыш яһау сираты саҡ дүртенсе көндә генә килеп етте, минән һуң тағы йөҙәрләгән гармунсы сығыш яһаны.***

*АФАРИН!*

# "БЫЙЫЛ ҒЫНА ӨС ЕҢЕҮ ЯУЛАП,

## мәҙәниәткә ат кеүек хеҙмәт итеүемде раҫланым..."



**(Башы 1-се биттә).**

- Минең менән булған хәл "Хыялдар тормошҡа аша!" тигән ҡанатлы һүҙҙәрҙең дөрөҫлөгөн тағы бер тапҡыр раҫланы. Гармунда алты йәшемдән уйнай башланым. Ул заманда ҡурай тартҡан кеше әллә ней юҡ та ине, ә гармун һәр малайҙың хыялы булды. Мәктәптән һуң мин Өфөгә сәнғәт училищеһына барҙым. Бәхеттән, унда гармунсылар әҙерләмәйҙәр икән, минә ҡурай класында уҡырға тәҡдим иттеләр. Белемемде ошо йүнәлештә һуңынан Өфө сәнғәт академияһында дауам иттем. Аҫҡарға килгәнсе Салауат музыка училищеһында, Магнитогорскиҙа Башҡорт сәнғәт йортонда, үҙебеҙҙең Йәнгел музыка мәктәбендә ҡурай кластарында уҡыттым.

Бала саҡтан Геннадий Заволокиндың "Играй, гармонь любимая!" телетапшырыуының һәр сығарылышын йотлоғоп ҡарай, үҙем дә унда ҡатнашырға хыяллана торғайным. Армияла хеҙмәт иткәндә үҙен күрергә лә насип булды. "Рәсәйҙең беренсе гармунсыһы" телевизион төркөмө менән мин хәрби оркестрҙа хеҙмәт иткән Амур өлкәһенең Тында ҡалаһына килгәйне ул. Беҙ ҙә уның тапшырыуында ҡатнаштыҡ. Шунда халыҡтың Геннадий Дмитриевичты ни тиклем яратыуын үҙ күҙҙәрем менән күреп хайран ҡалдым. Шул ваҡытта уға гармунда уйнап күрһәткем килгәйне, тик гармун булманы. Ысын музыканттарҙың уйын ҡоралдарын кешегә тоттора һалып бармай торған ғәҙәтен белгәнгә, берәйһенән һорап торорға ла ҡыйманым. Ярай, Заволокин берәй ҡасан беҙҙең яҡтарға ла килеп сығыр әле, уға мотлаҡ бер уйнап күрһәтәсәкмен, тип ҡарар иттем. Уның үлеме тураһындағы хәбәр күңелемде төшөрһә лә, хыялымды үҙенең ғәмәл дәфтәренә яҙып ҡуйған Хоҙай барыбер "Играй, гармонь!" Рәсәй үҙәге етәкселәре Анастасия һәм Захар Заволокиндар менән танышырға насип иттерҙе. Был бәхетле осрашыу ике йыл элек "Играй, гармонь!" тапшырыуы Магнитогорск ҡалаһында төшөрөлгән ваҡытта булды. Унда Заволокиндар минә иғтибар итте, Новосибирскиға шул уҡ йылда үтәсәк фестивалгә саҡырҙылар. Әсәйем, билдәле сәсәниә Хәнифә Әбүбәкерова бала сағымда алып биргән иҫке ябай гармун менән оло еңеүгә ынтылып булмағанын үҙем дә аңлай инем, әлбиттә. Шулай ҙа конкурстың лауреаты дипломына эйә булдым. Анастасия ике йылдан тағы көсөмдө һынап ҡарарға тәҡдим итте, тик гармунымды яңыртырға ҡушты.

Фестивалгә ҙур ихласлыҡ менән әҙерләнә башланым. Әлбиттә, иң тәүҙә яңы гармун кәрәк ине. Булғас, булһын тип, Тула оҫталарына гармун яһарға интернет аша заказ бирҙем. Улар һәр талымымды (каприз) үтәп, нәҡ үҙем теләгәнсә итеп, өс айҙан гармунымды эшләп тә бирҙеләр. Хаҡы минең өсөн ҡыйбат ине. Их, был аҡсаға машина алырға була бит, тип шаяртты дуҫтар. Минең өсөн гармундан да ҡәҙерле әйбер юҡлығын аңлаған әсәйем ярҙамға килде. Үҙемдә "копейка"нан "Мерседес"ҡа күсеп ултырған кеше кеүек тойҙом!

Хәҙерге конкурстарҙа иң яҡшы сығышҡа гран-при тапшырып, беренсе, икенсе, өсөнсө урындарҙы ҡалған бөтә ҡатнашыусыларға бүлгеләп биреү модаға инеп китте. Йәнәһе, берәүҙә лә рәнйетмәйҙәр. Ә бына "Играй, гармонь"да улай түгел. Унда гран-при, "Тамашасы һөйөүе" бүләге менән бергә ни бары биш төп приз бирелә. Ҡалғандары - лауреат дипломдары, төрлө бағыусыларҙан, Заволокиндарҙың үҙҙәренән махсус бүләктәр. Мин "Тамашасы һөйөүе"нә иҫәп тоттом. Уны алыу өсөн ниндәйҙер башҡаларҙы ҡабатламаған, хатта уникаль сығыш әҙерләргә кәрәклеген күреп ҡайтҡайным инде. Көн кеүек асыҡ: унда ҡурай булмаясаҡ, тип уйланым мин баштан. Ә беҙҙең милли ҡоралдың ошоға тиклем берәүҙә лә битараф ҡалдырғаны юҡ әле! Ысынлап та, уң ҡулыма ҡурай тотоп, һулы менән "Тула һандуғасы" телдәрен бейеткәндә, башына ҡамсат бүрек кейгән камзуллы егетте жюри ла, тамашасылар ҙа йотлоғоп күҙәтте. Башта сығышымды ҡурай менән "Сыңрау торна", "Кәкүк" халыҡ көйҙәренә вариациялар менән астым да, йәйләп гармун менән ҡушылып, "Һыбайлылар" һәм "Юлдаш" көйҙәрен башҡарҙым.

Ҡасандыр Йомабай Иҫәнбаевтың Францияла ҡурай менән халыҡты аптыратыуын хайран ҡалып һөйләгән булабыҙ. Бәхеттән, беҙҙең милли ҡоралды белмәгән кешеләр Рәсәйҙә лә етерлек икән. Күптәр, француздар ише, ҡурайҙы әйләндереп-тулғандырып ҡаранылар, көй сығара торған нәмәһе ҡайҙа тора һуң, тип һораштылар, өрөп-өрөп, нисек моң сығыуын аңлай алмай ыҙаланылар. Яңылышманым: ҡурай минә ныҡ ярҙам итте, әммә гармуным да дан ине. Ике уйын ҡоралының уңышы иллегә-илле булды тип һанайым.

Иң тулҡынландырғысы конкурсҡа йомғаҡ яһаған саҡта булды. Ғәҙәттә бит бүләкләү тантанаһын иң түбән баҫҡыстан башлап, иң һуңында гран-при тапшыралар. Бында ла тәүҙә утыҙ кешене фестивалдең лауреаты тип иғлан итеп, диплом тапшырырға сәхнәгә саҡырҙылар. Улар араһына эләккәс, быны төп приздан ҡолаҡ ҡағыу икән тип аңлап, көйәфем ныҡ ҡырылды. Тамашасы һөйөүе бүләге лә икенсе кешегә китте. Ни хәл итәһең, конкурсанттар күп, барыһы ла талантлы, төплө әҙерлек менән килгәндәр, был гүзәл, ошо сама кеше араһында дипломант булыуы ла ҙур мәртәбә, тип үҙем-үҙем йыуатып маташам. Шул ваҡыт "Өсөнсө урын Башҡортостан Республикаһынан Азат Атанғоловҡа!" тигән иғлан яңғырағас, аптырауҙан һәм тулҡынланыуҙан ҡолап китә яҙҙым. Фестивалдең кубогын ниндәй хәлдә сығып алғанды күҙ алдына килтерәһегеҙҙер, моғайын. Исемем уйып яҙылған ошо тос, матур кубоктан башҡа минә бер нәмә лә кәрәкмәй ине. Хоҙайға рәхмәт, бар тырышлығымды бүләкләне, хыялымды тормошҡа ашырҙы! Тимәк, Новосибирскиға тиклем машинамда яңғыҙым тегеләй-былайға дүрт мең саҡрым юлды бушҡа үтмәнем...

Аҙна буйы барған сарала мин 187-се һан аҫтында теркәлгәйнем, сығыш яһау сираты саҡ дүртенсе көндә генә килеп етте, минән һуң тағы йөҙәрләгән гармунсы сығыш яһаны. Шундай ауыр, арыҡтыҫ мәлдәргә ҡарамаҫтан, был сәфәрҙән тик яңғай тәьҫораттар ғына алып ҡайттым. Өлкәнең Ордын районында гармун фестивалдәрен үткәреү өсөн махсус рәүештә "Заволокин ауылы" төҙөлгән. Беҙ палаткалар ҡаласығында йәшәнек. Мендәрләгән кешене бушлай йәшәтеү һәм туҡландырыу мәсьәләһен Заволокиндарҙың дуҫтары булған бағыусылар үҙ өҫтөнә алғайны. Мин Рәсәйҙең беренсе гармунсыһының музейына ҡурай, башҡорт балы, районның фоторәссамы Иштимер Йосопов төшөргән Әбйәлил күренештәренең коллажын тапшырҙым. Жюри алдында сығыш яһағандан һуң төрлө концерттарҙа, оҫталыҡ дәрестәрендә сығыш яһаным, Обь йылғаһы буйлап теплоходта "Играй, гармонь!" тапшырыуына төштөм (ул экранға көҙ айҙарында сығасаҡ). Конкурсанттарҙың сығыштары йәрминкәләр, төрлө халыҡ уйындары, аттракциондар, театрлаштырылған тамашалар, ағас эштәре оҫталарының "Балта байрамы" менән үрелеп барҙы. Быларҙың бөтәһенә ун мендән ашыу кеше тамаша ҡылды тип яҙҙылар. Ошондай онотолмаҫ ваҡиғала ҡатнашырға ярҙам иткәндәре өсөн район хакимиәте, мәҙәниәт бүлеге, үҙем эшләгән сәнғәт мәктәбе етәкселегенә, әсәйемә һәм ғаиләмә сикһеҙ рәхмәтлемен.

Әйткәндәй, был - минең быйылғы йылда ғына өсөнсө еңеүем. Новосибирскиға китерҙән бер көн алда ғына Яҡтыгүл шифаханаһының умартасылыҡ базаһында үткән "Aneva" төбәк-ара фестивалендә ҡабалан ғына ҡатнашыуыма ҡарамаҫтан, "Солист-инструменталист" номинацияһында беренсе дәрәжә дипломға лайыҡ булдым. Был еңеүем тураһында һөйөнсө инде юлда сағымда ҡыуып етте. Унан алда РФ Йәмәғәтселек палатаһы Мәскәү мәҙәниәт һәм сәнғәт институты менән берлектә Магнитогорскиҙа ойошторолған "Магнит талантов" халыҡ-ара конкурсы дипломын алғайным.

Быйыл - Ат йылы һәм Мәҙәниәт йылы. Шуға, мәҙәниәткә ат кеүек хеҙмәт итәсәкмен тигәйнем, һүҙемдә торам, Аллаға шөкөр. Оло еңеүҙәр минә оло яуаплылыҡ та өҫтәне. Мин бит профессиональ ҡурайсы булһам да, гармунсы булараҡ һәүәҫкәрмен. Әммә үҙем эшләгән мәктәптә гармун класы асып, балаларҙы өйрәтергә теләйем. Югиһә, йәш быуында был музыка ҡоралына ҡыҙыҡһыныу юғалды. Ауылдарҙа гармун да, гармунсы ла таба алмайҙар хәҙер. Шулай уҡ Геннадий Заволокин исемендәге фестивалдә тағы ҡатнашырға ниәтләйем. Анастасия менән Захар "Һин беҙгә оҡшаның, маладис, тағы кил" тип ҡалдылар бит.

**Рәхимә МУСИНА яҙып алды.**

*ЗАУЫҠ*



# ӘСӘЙЕМ ҺАБАҠТАРЫ

* * *

Ваҡытында әсәкәйем
Хаталанғандыр инде,
Хаталарына үкенеп,
Яфаланғандыр инде.

Әрләй ине үҙен-үҙе,
Кешеләрҙә эше юҡ:
"Терһәк яҡын - тешләп булмай,
Артҡа тибер кеше юҡ!"

Аптырай инем ул саҡта,
Башыма һыймай ине:
Әсәйҙәр бит яңылышмай!
Шулай буламы инде?..

Нисек инде әсәй кеше
Мөмкин хаталанырға?
Ярай инде - хаталанған,
Ниңә яфаланырға?

...Үҙем хәҙер күптән әсәй,
Хаталанмайса булмай,
Мин дә үҙемде әрләйем,
Һүҙҙәрҙе һайлап тормай.

Минең хатам - мин әрләйем,
Башҡаларҙа эшем юҡ,
Терһәк яҡын - тешләп булмай,
Артҡа тибер кеше юҡ!

* * *

Ҡабатлай ине әсәйем,
Йыйылғанда бөтәбеҙ:
"Бер иле генә булһа ла
Өҫтөнөрәк йәшәгеҙ".

Апайҙарым-ағайҙарым
Гөрләтеп донъя көтә.
Өҫтөнөрәкме? Белмәйем.
Артыҡ та түгел үтә.

Тормош юлынан шым ғына,
Үҙемсә атлап киләм.
Өҫтөнлөгөн белмәһәм дә,
Кәм түгеллеген беләм.

Эшем дә бик ябай ғына,
Бик яуаплы булһа ла,
Донъям да әллә ни түгел,
Минә шәп тойолһа ла.

Уңғанлыҡта беребеҙ ҙә
Һине уҙа(а)лмаҫ ине.
Шуны беләм: минең өсөн
Йөҙөң ҡыҙармаҫ ине.

Өҫтөнлөгөм шулдыр, бәлки:
Мин ғәйбәт һөйләмәйем,
Көнсөллөктән янып-көйөп,
Яуызлыҡ теләмәйем.

Бик күп төрлө ғәйептәрҙе
Еңел кисерә алам,
Әммә хәтер һандығына
Төйөнгә төйнәп һалам.

Кешеләргә ярҙам итәм,
Хәлемдән килгән тиклем,
Килә ғүмерем һуҡмағын
Яҡты эҙ һалып үткем.

Өҫтөнлөкмө былар, әсәй?
Түгел микән? Белмәйем.
Нисә йылдар шул һорауға
Һаман яуап эҙләйем...

**Фирүзә АБДУЛЛИНА.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Тик ғәләмәттәр бының менән генә бөтмәй: теге ир юл буйына кемдәндер төшөп ҡалған ҡағыҙ аҡсалар йыя. Өйгә ҡайтҡас, ҡараһа, йыйғандары япраҡ булып сыға.*



ИНТЕРНЕТТАН



# БАҠСА ЕЛӘГЕ...
## иң "бәхетле" еләк

■ Лондон университеты ғалимдары баҡса еләген "иң бәхетле емеш-еләк" тип атаған. Эксперттар үткәргән һорау алыуҙарҙа 86 респонденттың 86 проценты был еләкте уйлауҙан ғына ла үҙҙәрен күпкә бәхетлерәк тойоуын белдергән. Баҡса еләгенең үҙенсәлекле еҫе хәтерҙә бәхетле мәлдәрҙе "уятырға" һәләтле икән. Ғалимдарҙың береһе Барри Смит әйтеүенсә, етештереүселәр күпме генә тырышмаһын, был еҫте яһалма рәүештә булдырыуы ауыр. Алма, банан һәм сливалар "бәхетле" емеш-еләктәр исемлегенең иң аҙағында килә.

■ Стресс гормоны - кортизол баш мейеһе эшмәкәрлегенә насар йоғонто яһап, хәтерҙең насарайыуына килтереүе ихтимал, тип яҙа Neuroscience журналы. Кортизол күләменең бер ваҡытҡа күтәрелеп алыуы һәйбәт, сөнки был мәлдә иғтибар көсәйә, ул кешегә тормош һынауҙарын еңеп сығырға ярҙам итә, тиҙ ҡарарға килеү һәләте барлыҡҡа килә. Әммә был гормондың даими рәүештә юғары кимәлдә булыуы кире эҙемтәләргә килтерә: аш һеңдереү менән бәйле проблемалар килеп тыуа, ауырлыҡ арта, ҡан баҫымы күтәрелә. Ғалимдар билдәләүенсә, стресс гормонының оҙайлы тәьҫире һөҙөмтәһендә баш мейеһенең айырым өлөштәрендә нервы күҙәнәктәре ҡыҫҡара. Айова университеты психологтары фекеренсә, был гормон депрессия йәки хроник стресс кисергән пациенттарҙа осрай һәм улар етди дауалауға мохтаж.

■ Идеаль көн режимы ниндәй булырға тейешлеге тураһында уйланғанығыҙ бармы? Лондон колледжы ғалимдары билдәләүенсә, иртәнге аш сәғәт 7-лә булырға һәм ул организм өсөн кәрәкле бөтөн элементтарҙан торорға тейеш. 7:15 - витаминдар ҡабул итеү мәле. Тештәрҙе ашағандан һуң ярты сәғәт үткәс таҙартырға кәрәк, сөнки ризыҡта теш эмаленә кире йоғонто яһаусы кислоталар бар. 8:30 - ҡояш нурҙары аҫтында асыҡ һауала йөрөү мәле. Тап ҡояш яҡтылығы "йоҡо" гормоны мелатонин бүленеп сығыуын туҡтата, ә D витамины онкологик һәм йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән һаҡлай. Иң мөһим мәсьәләләрҙе иртәнге 10-да хәл итергә кәрәк. Төшкө аш сәғәт 1-ҙә, ул йылы аштан, икмәктән, салат һәм емеш-еләк компотынан торһа, яҡшыраҡ. Бындай рацион мейе әүҙемлеген көн дауамында һаҡларға ярҙам итәсәк. Электрон почтаны көндөң тәүге яртыһында ҡарарға кәрәкмәй, бер юлы эшләп тә, почтаға килгән хаттарға яуап та яҙып кеше тиҙ арый. Был эште төшкө аштан һуңғы мәлгә ҡалдырығыҙ. Ашағандан һуң йоҡо килә икән, бер аҙ урамда йөрөп килергә була. 17:30 - спорт менән шөғөлләнеү өсөн идеаль ваҡыт. Киске аш йоҡларҙан 3-4 сәғәт алда булырға тейеш. Киске аш мәлендә шәкәрҙе күп ашаһаң, йоҡлап булмай, шуны ла онотмағыҙ.

■ Тиреләге һырҙарҙы төрлө үлән һәм емеш-еләк төнәтмәләре өҫтәлгән боҙ ярҙамында бөтөрөргә була. Һәр иртә һайын бит тиреһен боҙ менән ышҡыу тирене шымарта, матдәләр алышыныуын, ҡан әйләнешен яҡшырта. Ғалимдар бер ай буйына үткәргән һынауҙарҙа 2 ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан. Уларҙың береһе иртәле-кисле боҙ ҡулланған, икенсеһе битен һыу менән йыуған. Һөҙөмтәлә, тәүге ҡатнашыусыла күҙәнәктәрҙең ҡартайыу процесы яйланғанлығы асыҡланған.

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ



# УЙЫЛДАН МУЛЛА

**Халҡыбыҙҙың аҫыл заттарының береһе - Бөрйән районы Үрге Нөгөш ауылы муллаһы Уйылдан Мөхәмәҙиә улы Аҫылғужин тураһындағы хәтирәләремде дауам итәм.**

Атайымдың гайморит менән ауырығанда ла Уйылдан бабайға дауаланырға барғанын хәтерләйем. Уйылдан бабай үләндәрҙе яҡшы белә ине, атайымды аҫҡарһаҡ үләне менән дауаланы. Атайым аҙаҡтан да бесән ваҡытында аҫҡарһаҡты йолҡоп алыр ҙа тамырын еҫкәр ҙә йөрөр ине.

Кешеләр әйберҙәрен юғалтһа ла Уйылдан бабайҙан ярҙам һораны. Ул химик ҡәләме менән ҡағыҙға доға яҙып бирер ҙә берәй мөйөшкә ҡыҫтырып ҡуйырға ҡушыр ине. Үҙе йылмайып:

- Был доғалар урлашҡан кешенең күңеленә шом, ҡурҡыу тойғоһо һала. Күреп тор, әйберендә ишек алдына йәки баҡсаңа ырғытып китер ул кеше, - тип әйтер ине. Шулай була торғайны ла.

Ун йылдар самаһы электер, иптәшем менән Учалы баҙарынан китеп бара инек, әллә ҡайҙан ҡысҡырып, бер ҡатын беҙҙе туҡтатты. Ул миңә:

- Килен, һин Ғәлиәкбәрҙән бит. Ямаш тигән ауылдағы Уйылдан мулла тереме әле? - тип һораны.

- Уның үлгәненә ни заман инде, - тинем аптырап.

- Улыбыҙ бик ҡаты ауырып киткәс, таныштарыбыҙ Бөрйән районындағы Ямаш ауылында йәшәгән Уйылдан муллаға барырға кәңәш иттеләр. Ғәлиәкбәрҙә һинең атайың менән әсәйеңә фатирға төштөк. Рәхмәт төшкөрө, атайың беҙгә юл күрһәтте, балабыҙҙы күтәрешеп алып барышты. Уйылдан бабайға ҙур рәхмәтлебеҙ, балабыҙҙы ихлас күңелдән тәрбиәләне. "Тағы ла бер килеп китерһегеҙ әле, үҙем тере булмаһам, ҡәберемде булһа ла уратып сығырһығыҙ", - тигәйне. Шөкөр, улыбыҙ башҡаса ауырыманы, Ямашҡа ла барырға тура килмәне,- тип һөйләне ҡатын.

2005 йылда уҡыусылар менән Өфөгә олимпиадаға барғайным. Мәғариф министрлығында эшләгән бер ҡатын (ҡыҙғаныстҡа ҡаршы, исемен онотҡанмын) туғандарына аҡса ебәрергә булып, мине эҙләп тапты.

- Учалы районы Ишмәкәй ауылынанмын, - тип таныштырҙы үҙен. Минең Бөрйән яғынан икәнемде белгәс:

- Һеҙҙең күрше ауылда мулла бабай йәшәй ине, тереме әле?- тип һорап ҡуйҙы.

- Юҡ,бабай күптән баҡыйлыҡҡа күскән шул. Ә һеҙ уны ҡайҙан беләһегеҙ? - тип һораным.

- Минең атайым шул тиклем йүткерә торғайны, врачтарға йөрөп ҡараны, шәбәйә алманы. Әллә ҡайһыһы һеҙҙең яҡта шундай көслө мулла бар тип өйрәтеп ебәргән. Бабай атайымды өшкөрөп тәрбиәләгәндән һуң, башҡа бер ваҡытта ла йүткермәйәсәге тураһында әйткән. Атайым эстән генә, хәйерем етмәҫме икән, тип көйөп ултырғанын да белгән бабай:

- Хәйерең өсөн ҡайғырып ултырма. Бөгөн ҡайтам, тип, юлға сыҡма, транспорт булмаҫ, барыбер кире әйләнеп килерһең, - тигән. Ысынлап та, атайым ҡабаланып ҡайтырға сыҡһа ла, юлы уңмаған, кире әйләнеп килгән. Уйылдан бабайҙан өшкөрөп тәрбиәләнгәндән һуң, атайым башҡаса йүткереп ауырыманы, - тип һөйләгәйне.

### Ғәлиәкбәр ауылынан Ғәйшә Ишмөхәмәтова һөйләгәндәрҙән

Уйылдан еҙнәгә дауаланырға ике-өс мәртәбә барғанмындыр әле. Иң тәүҙә күҙҙәрем, аяҡтарым шешенеп барҙым, өшкөрөп тәрбиәләгәйне, һыҙланыуҙарым ҡул менән һыпырып алғандай булды.

- Балдыҙ, төшөңдә нимәләр күрҙең? - тип һораны.

- Бер ҡарт артмаҡ-шартмаҡ әйберҙәрен йыйып алған да, үгеҙгә арҡаһы менән ятып, һыуға төшөп китте. Һаҡалы һәлпәйеп кенә һыуға батып үлде, - тинем.

- Ауырыуың китте, ипләп кенә йөрө, күҙ тейгән, - тине.

Бер мәлде билем ныҡ итеп ауыртып алып китте. Почтала эшләгән Фатима менән икәүләп Уйылдан еҙнәгә тәрбиәләнергә барҙыҡ. Фатима ҡайтып китте, ә мин ваҡ-төйәк өшкөртөп алайым, тип тороп ҡалдым. Уйылдан еҙнә:

- Йоҡлап ҡайт, - тине.

- Юҡ, йоҡламайым, минең балаларымды кем ҡарай ҙа өс һыйырымды кем һауа, бабай ҙа өйҙә юҡ, - тинем.

- Йоҡлап ҡайт, балаларыңды ла ҡарарҙар, һыйырҙарыңды ла һауырҙар, - ти был. Әллә ни эшләп йоҡламаным шул. Ҡайтырға сыҡтым. Нөгөш буйына төштөм дә Ҡалайылға яғына, ямаштар эшкә йөрөй торған яҡҡа, киткән дә барғанмын. Бара биргәс, аҙашҡанымды аңғарып ҡалдым. Ғүмер буйы йөрөгән юлдан аҙашып китеп барсы әле. Кире әйләнеп килеп, Нөгөштән аша сығып, үҙемдең ҡайта торған юлымдан киттем.

Аҙаҡ әбейе:

- "Әйттем бит мин уға, ҡайтма, тип, аҙашты бит был, ҡурҡып ҡуймаһа ярар ине" тип, һин яңылыш юлдан киткәс, көйөп ултырҙы. Еҙнәң һине шаяртып, юрамал ғына аҙаштырҙы бит ул, - тине.

Закир еҙнәм үлгәс, күп илауҙан Фатима апайымдың күҙенә аҡ һалды, күрмәй башланы. Ул бер көндө:

- Үтә һуҡыр булмаҫ элек, Уйылдан еҙнәгә алып бар мине, - тине. Алып барҙым апайымды. Уйылдан еҙнә епте төйөп, өшкөрөп, беләгенә таҡты ла:

- Епте юғалтма, күҙеңдең ағы бөткәнсе, ошо епкә ҡарап йөрө, - тине. Ысынлап та, шул епкә ҡарап йөрөй торғас, апайымдың күҙендәге ағы бөттө.

Кешеләрҙең нимә уйлап ултырғанын да белә торғайны шул Уйылдан еҙнә. Саҡанан Хафиз бабайҙың әбейе Гөлзәйнәп инәй дауаланырға барған. Уйылдан еҙнә өшкөрөп ултырғанда, әбей Зәғифә апайға ҡарап: "Үҙе ниндәй һап-һау, таҙа ир, был кәкере генә ҡатынды әҙәмгә һынап йәшәйме икән?" - тип уйлап ултырған. Бабай өшкөрөп бөткәс:

-Мөхәббәт бит, ҡоҙағый, ни эшләйһең инде, - тип яуап биреп, Гөлзәйнәп инәйҙе шаҡ ҡатырған.

### Ғәлиәкбәр ауылынан Һәҙиә Хөснитдинова инәйем мәрхүмә хәтирәләренән

Уйылдан ағай кеше килерен алдан белеп, әбейенә ут яғырға, самауырына һыу һалырға ҡушыр булған. Борхоп торған самауыр табынға ҡунаҡлауға, юлаусы килеп тә кергән. Ныҡ сирлеләрҙе, бигерәк тә балаларҙы, мәртәбәле кешеләрҙе алып килһәләр, ҡапҡа асып көтөп торҙо. Кисекмәҫтән ярҙам кәрәктәрен йәһәтләп алып инеп, дауалай ҙа башлар ине. Ул дауалай алмаған сир булдымы икән: яман ауырыумы, быума (эпилепсия), биҙгәк, астма һ.б. медицина көсөнән килмәгән сирлеләрҙе лә аяҡҡа баҫтыра ине. Ләкин ҡайһылыр сирҙе, был врачтарҙыҡы, тип, дауаханаға барырға кәңәш бирер ине. Телһеҙҙәрҙе лә телле иткән кеше бит ул.

Ямаш, Ғәлиәкбәр эргәләрендә күп кенә ерҙәр райондағы совхоздың, колхоздың йәйләү һәм бесән әҙерләү майҙаны булды. Эш буйынса ла, кәсеп менән дә техникалары ауыл эсендә лә күренгеләй ине. Шулай бер ваҡыт "Ҡыҙыл таң" колхозы тракторсыһы "Беларус"ы менән Ямаш халҡына солярка "елгәреп" йөрөгән. Уйылдан ағайҙың өйө тәңгәленән үткәндә, тоҙло - боросло һүҙҙәрен түккән. Ямаш менән Ғәлиәкбәр араһында әллә нисә кисеү бар. Тәүге кисеүҙә үк Нөгөш уртаһында тегенең тракторы һүнгән. Уның техникаһын һөйрәшеп яфаланған ауыл кешеләре:

- Мулланан ғәфү үтенмәйенсә, ҡайта алмайһың, - тигәндәр. Нисек кенә тырышһа ла, нисек кенә маташһа ла, ҡайта алмаған тракторсыға мулланан ғәфү үтенмәйенсә сара ҡалмаған...

Тағы шундай ваҡиғалар хәтерҙә. Сирлене муллаға алып килеүсе шофер үҙе лә күренеп, дауаланып сығырға булған. Аҡсаһы булмағас, кешенән бурысҡа алып торған. Уны дауалап бөткәс, Уйылдан ағай аҡсаһын кире биргән дә, эйәһенә тапшырырға ҡушҡан.

Ауырыу ғына ҡатынын муллаға алып килеүсе ир хәйергә тип һарыҡ һуйып алған була. Тик хәйерен күпһенеп, Ямаш юлында уның яртыһын ағас төбөнә йәшереп китә. Ҡатынды тәрбиәләп бөткәс, Уйылдан ағай: "Юлда ҡалдырып киткән итегеҙҙе бүреләр ашаны инде", - тигән. Ысынлап та, теге иттән елдәр иҫкән була. Тик ғәләмәттәр бының менән генә бөтмәй: теге ир юл буйына кемдәндер төшөп ҡалған ҡағыҙ аҡсалар йыя. Өйгә ҡайтҡас, ҡараһа, йыйғандары япраҡ булып сыға.

Ямашта эске касафатынан, балалары менән ҡатынын етем ҡалдырып, бер ир аҫылынып үлде. Мулла әҙәм балаһының үҙ йәнен үҙе ҡыйыу ҙур гонаһ икәнен, ундай кешене теге донъяла ниндәй яза көтөүен аңлатҡанда төркөм эсендәге бер кеше уның һүҙҙәренән көлгән. Ул, мәйетте ерләгәс, ҡәбер янында ултырып ҡалған. Һуңынан:

- Туғандар, был донъя ожмах икән, баҡыйлыҡҡа күскәс, донъялыҡта ҡылған алама ҡылыҡтарың өсөн яуап биреү ниндәй ауыр, ҡурҡыныс,- тип һөйләгән.

...Уйылдан ағай бер ваҡытта ла кешене хаҡ ҡуйып дауаламаны. Һәр кем хәйерҙе хәленә ҡарап үҙе самаланы. Әүлиәлеге менән мохтаждарҙың хәлен белеп, аҡсаларын кире ҡайтарыр булды. Күп тип иҫәпләһә, бер өлөшөн генә алыр ине. Алған хәйерҙе лә етерлек кенә ҡалдырып, ҡалғанын үҙе хәйер итеп таратты.

Ҡыҙы Зәйнәп әхирәтем булды. Уның: "Бесән мәлендә ямғыр болото килһә, атайым болоттарҙы доға менән ҡыуып ебәрә ине," - тип һөйләгәне хәтерҙә.

**Шәһүрә ӘХМӘҘИЕВА.**
**Учалы районы.**
**(Дауамы. Башы 30-сы һанда).**

✓ *Ҡупшы ханым янсығындағы эре аҡсаларын төпкәрәк этеп, тинлектәрҙе шылтыратып һанай башланы. Шул ваҡыт олораҡ йәштәрҙәге бер ағай ҡатындың алдына сыҡты ла, һатыусы апайға eләктәре өсөн ул һораған хаҡты һуҙҙы.*

*ҺАБАҠТАР*

**Бынан бер нисә йыл элек булды был хәл. Билдәле булыуынса, июнь уртаһы етеп өлгөрәме-юҡмы, ауыл уңғандары иң ҡыҙыл, эре матурҙарын ғына һайлап йыйып, ер еләктәрен баҙарға һатырға сығара. Уларҙы бер кем дә иғтибарға алмай үтеп китмәй. Туҡтап, һоҡланып, хуш еҫен еҫкәп булһа ла китәләр. Кемдер хаҡын һораша, икенселәре ҡайһы яҡтың еләге булыуы тураһында ҡыҙыҡһына. Өсөнсөләр бер-икене генә тәмләп ҡарарға теләүен белдерә. Ихласлығы, бер ҡатлылығы һәм киң күңеллелеге менән айырылып торған, ҡояш ҡыҙыуында еләктән дә былайыраҡ ҡыҙарып бешкән ауыл апайҙары, инәйҙәр, һеңлеләр емеште ҡайҙан йыйғанын, еләкле урындың ҡайҙа ятҡанын - береһен дә йәшермәй-нитмәй һөйләп бирә.**

# НӘФСЕГӘ БАШ БУЛАЙЫҠСЫ,

## йәки еләк һатҡан ҡатындар тураһында бер кәлимә



Бына йәйҙең иң эҫе бер көнөндә тау үрҙәрен ҡыҙырып, көнгә ҡыҙынып, ҡара-ҡыҙыл төҫкә ингән шундай апайҙарҙың береһе янында ап-аҡтан кейенгән, киң тирәсле эшләпәле, ҡара күҙлекле ханым туҡтаны. Ҡулына ла ырғаҡ менән бәйләнгән бирсәткә кейгән, уныһының ҡуңысын терһәгенә тиклем тартҡан.

- Һеңлем, еләгең күпме тора? - тип һораны. Тейешле хаҡты ишеткәс:

- Тейерен генә әйт тә, алам да китәм, - тип нығышты.

Апай тағы тәүҙә әйткән хаҡты ҡабатланы.

- Ергә түшәлеп ятҡан тәбиғәт байлығын шул хаҡҡа һатып байырмын тиһеңме... - Аяуһыҙ ҡояштан үҙен нығ һаҡлаған ҡупшыҡай ханым еләк һатыусыны оялтырға маташты. - Әйткән хаҡыңдың яртыһына бир ҙә ҡуй, әйҙә. Һин һатып ҡыуанырһың, мин - алып, тигәндәй. Ана, баҙар тулы еләк, һин бирмәһәң, шул хаҡҡа мин башҡаларҙан да ала алам. Ә һин һата алмайынса, кире алып ҡайтырһың әле еләгеңде. Тағы бер ярты сәғәт торһаң, был еләгең бер нәмәгә лә эшкинмәйәсәк бит...

Ҡарағусҡыл ҡыҙыл төҫкә инеп янған апайҙың йөҙөндә икеләнеү билдәһе сағылды. Бәлки, һатыулашҡан ҡатындың хаҡына күнмәгәне өсөн уңайһыҙланыу тойғоһо кисергәндер, ауыл ҡатындарының намыҫсанлығын ҡайҙа ҡуяһың! Шуны ғына көткән ҡупшы ханым сумкаһына тығылды ла, янсығындағы эре аҡсаларын төпкәрәк этеп, тинлектәрҙе шылтыратып һанай башланы. Шул ваҡыт олораҡ йәштәрҙәге бер ағай эшләпәле ҡатындың алдына сыҡты ла, һатыусы апайға еләктәре өсөн ул һораған хаҡты һуҙҙы.

- Ни йөҙө менән оялмайынса ярты хаҡҡа алырға уйлайҙыр, - шулай һөйләнә-һөйләнә ҡатындың күнәген үҙенә табаныраҡ тартты. - Ер байлығы булһа һуң! Улай буштан буштың теләгәс, ни эшләп үҙе йыймай? -Башҡаларҙан үҙенең өҫтөнлөгөн белдерергә теләп, тамаҡ төбө менән һөйләшкән яңғырауыҡлы тауышлы ҡатынды был ағай ҙа ишетеп торған, күрәһең...

Еләк йыйыуы анһат эш түгел, әлбиттә. Тауыҡ сүпләһә лә бөтмәй торған эшен ҡалдырып, көн оҙоно ҡыҙыу ҡояш аҫтында баш күтәрмәй йөрөп йыйған, аҙ ғына булһа ла аҡса йүнәтәйем тип, балаларының ауыҙынан өҙөп һатырға алып сығып киткән был ҡатынды мин дә йәлләп торғайным. Еләк кәрәкмәгәндән сығып баҫмаған бит инде ул баҙарға. Кәрәкмәһә, бөтөнләй йыймаҫ ине, ҡояштан ҡасып, күләгәлә генә ултырыр ине. Уны бында мохтажлығы алып сыҡҡанлығы көн кеүек асыҡ. Был эшләпәле ханыма ҡарағанда күпкә аҡсаға мохтаж булыуына ҡарамаҫтан, үтенеп һорағас, уға ярты хаҡҡа бирергә лә риза ине бит ул еләген...

Ҡупшыҡай ризаһыҙлыҡ белдереп, тамаҡ төбө менән нимәлер әйтеп маташты, әммә уны бер кем дә ишетмәне лә, тыңламаны ла. Артабан ул үҙ юлы менән китеп барҙы. Ә теге киң күңелле йомарт ағайға еләк һатыусы апай ғына түгел, ә уның эргәһендәгеләрҙең бөтәһе лә рәхмәт уҡыны.

Был хәл һаранлыҡ, ҡомһоҙлоҡ әҙәми заттың иң түбән, ытырғаныс сифаттарының береһе икәнлеген генә тағы бер тапҡыр ышандырғайны.

Ошондай кире сифаттарға эйә булғандарҙың урлашырға, кеше иҫәбенә байырға ынтылышы булыуын асыҡлаған тикшеренеүҙәр бар. Калифорния университеты ғалимдары түбәндәгеләрҙе иҫбатлаған: байҙар төрлө әхлаҡи ҡағиҙәләргә еңел ҡарай, уларҙың күбеһен һанламай. Мәҫәлән, ҡыйбатлы автомобиль йөрөтөүселәр башҡаларға ҡарағанда юл хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен йышыраҡ боҙа икән.

Тағы бер тикшеренеү һөҙөмтәһе шундай: ғалимдар студенттарға тәм-том менән һыйланырға тәҡдим иткән. Етеш ғаиләлә үҫкәндәр бер ниндәй тартыныуһыҙ-ниһеҙ һауыттағы кәнфиттәргә үрелеп, ашай башлаһа һәм һуңынан ашарға тип, кеҫәләренә һалһа, уртаса йәки аҙ килемле ғаиләләрҙә үҫкәндәре 1-2-не тәмләп ҡараған йәки бөтөнләй һыйҙан баш тартҡан.

Ғөмүмән, ғалимдар, аҡса кешене боҙа, тигән нығлы ҡарарға килгән. Ундайҙар башҡаларға өҫтәнерәк ҡарай, үҙенә бөтә нәмә лә рөхсәт ителгән, тигән кеүегерәк фекерләй. Быны инде беҙ дауаханала, башҡа төрлө ҡабул итеүҙәрҙә сират көтөп ултырғанда йыш күрәбеҙ. Иғтибар итһәгеҙ, затлы кейенгәндәр, зиннәтле балдаҡ-муйынсаҡтар таҡҡандар талашып-тартышып булһа ла, сиратһыҙ инергә тырыша.

Баҙар ул шуның өсөн баҙар, унда һатыулашырға була, тиеп, кемдер минең менән килешмәҫ тә. Уныһы шулай, әлбиттә. Әммә кем менән һәм күпмегә һатыулашҡаныңды белеү ҡамасауламаҫ. Йылдар буйы аҡса күрмәй, осраҡлы һәм миҙгелле эш хаҡына, йәғни һуғым ваҡытында - итен, көҙөн - ҡош-ҡортон, йәйен - еләк-емеш, һөт-ҡаймаҡ һатып көн күргән ауыл ҡатындарын алдарға, оторға тырышыу, минеңсә, оятһыҙлыҡ һымаҡ.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

*БАЛАҢА УҠЫ!*

# НИНДӘЙ МАЛАЙ ҺӘЛӘТЛЕ?

Өс ҡатын ҡулдарына ауыр кәрзин тотоп, баҙарҙан ҡайтып килә. Бер аҙҙан улар юл ситендәге эскәмйәгә ял итергә ултыра. Һөйләшә торғас, балалары тураһындағы хәбәргә тотона былар. Ҡатындарҙың береһе улының физик яҡтан көслө булыуы, оҙаҡ итеп бер ҡулында йөрөй алыуы менән маҡтана. Икенсеһе улының һандуғас кеүек йырлауы, бар халыҡтың уға һоҡланыуы тураһында һөйләй. Өсөнсө ҡатын әхирәттәренең һүҙен өнһөҙ генә тыңлай. Улдары менән маҡтанған ҡатындар унан:"Ниңә улың хаҡында бер ни ҙә әйтмәйһең?" - тип һорай ҡуя. "Минең улымдың маҡтанып телгә алыр һәләтлектәре юҡ", - ти ҡатын.

Был һөйләшеүҙе тыңлап торған бер ҡарт ҡатындарҙың артынан китә. Бына ҡатындар йорттары эргәһенәрәк еткәс, кәрзиндәрен ергә ултыртып, бил яҙып, талған беләктәрен ыуғылап тора. Әсәләрен күреп, малайҙары улар янына йүгереп килеп етә. Улдарҙың береһе баштүбән тороп, бер ҡулында йөрөп күрһәтә. Икенсе малай таш өҫтөнә ултырып, әсәһе яратҡан йырҙы йырлап ебәрә. Был малайҙарҙың әсәләре ҡәнәғәт йөҙ менән ҡул саба, ҡыуанысын белдерә. Ә өсөнсө малай әсәһе эргәһенә килеп, уның ҡулынан кәрзинен ала һәм:"Әсәй, ҡана мин һиңә ярҙам итәйем" , - ти.

Шул саҡ ҡатындар эргәләренән уҙып барыусы ҡартты күреп ҡала һәм унан малайҙарҙың һәләтлеге тураһындағы фекерен һораша.

- Мин бында бер генә һәләтле малайҙы күрҙем, - ти ҡарт. - Ул үҙенең әсәһенә ярҙам итергә ташланған бала. Ул Бәйғәмбәребеҙҙең изге хәҙисендә әйтелгәнсә эшләне:"Кәңәшем - һәр кем үҙ әсәһенә ярҙам итһен".

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

### Ыңғай көйләнеш

Көйләнешегеҙ һеҙҙең ғәмәлдәрегеҙҙе билдәләй. Был йәһәттән ғаилә тормошо мәсьәләләре буйынса эксперт-консультант Деннис Уайтли бына нимә ти: "Еңеү тыумыштан бирелгән интеллект кимәленә һәм һәләткә, шарттарға, урын-ваҡытҡа түгел, ә көйләнешкә бәйле. Көйләнеш - уңыш критерийы". Һеҙҙең психологик көйләнешегеҙ төп ролде уйнай һәм ниндәй ғәмәлдәр башҡарыуығыҙҙы билдәләй.

Һеҙҙең кешеләрегеҙ - көйләнешегеҙҙең көҙгөһө. Кирегә көйләнеш алып та, үҙҙәренең ҡул аҫтында эшләүселәрҙең һәр саҡ оптимист һәм йәшәү дәрте менән яныуын көткән лидерҙар аптырата. Магнит ҡануны ғәҙел: үҙегеҙ ниндәй, тирә-яғығыҙға шундай кешеләрҙе генә тартаһығыҙ. Эдисон бер ваҡыт шулай тип белдергән: "Әгәр беҙ балаларыбыҙға үҙебеҙҙәге энтузиазм көсөн генә мираҫ итеп ҡалдырһаҡ та, был улар өсөн иң ҡиммәтле бүләк буласаҡ".

Яҡшы көйләнеште һаҡлауы юғалғанын тергеҙеүгә ҡарағанда еңелерәк. Үҙенең "Земля и алтарь" китабында Юджин Петерсон: "Йәлләү - кешелә булған иң изге хис-тойғо; әммә үҙенде йәлләү - иң оятылыр, моғайын. Үҙ-үҙеңде йәлләү һинең тулыһынса тормошҡа әҙер түгеллегеңде, ысынбарлыҡты ҡабул итеүеңде тулыһынса боҙоп күрһәтеүсе насар ауырыу... Был сифат үҙенең ҡолдарын буш боғаҙға һәм мөртәткә әйләндереүсе үҙенсәлекле наркотик", - тиеүе юҡҡа түгел. Әгәр ыңғай көйләнештә булһағыҙ, уны һаҡлағыҙ.

Уйланырға мәжбүр итеүсе һорауҙар. Инглиз хирург-кардиологы Мартин Ллойд-Джонс: "Был тормошта күпселек бәхетһеҙлектәр үҙегеҙ менән һөйләшеү урынына үҙегеҙҙе тыңлауҙан килеп сыға", - тип раҫлаған. Ә ниндәй эске тауыштарҙы ишетәһегеҙ? Төрлө кешеләр менән аралашҡанда, улар һеҙҙе мотлаҡ ауыр хәлгә ҡуясаҡ йәки алдаясаҡ, тимәксеһегеҙме? Юл сатында торғанда эске тауышығыҙ, мотлаҡ уңышһыҙлыҡ кисерәсәкһегеҙ, тип шыбырлаймы? Әгәр эске тауышығыҙ кире уйҙар тылҡый икән, уйығыҙҙа ғына үҙегеҙҙе дәртләндереүсе телмәр тотоғоҙ, кире күренештәр йәки хәл-ваҡиғалар тураһындағы уйҙарығыҙҙы алыҫҡараҡ ҡыуығыҙ.

**Өйгә эш: Үҙегеҙҙең психологик көйләнешегеҙҙе яҡшыртыу өсөн түбәндәгеләрҙе эшләгеҙ:**

- "Позитив диета"ға ултырығыҙ. Әгәр ниндәйҙер ыңғай нәмәгә һыуһаһағыҙ, даими рәүештә үҙегеҙҙе һуғарып торорға һәм дәртте арттырыусы төрлө материалдарҙан торған аҡыл диетаһына ултырырға тейешһегеҙ. Ыңғай көйләнеште үҫтереүсе китаптар уҡығыҙ. Дәртләндереүсе аудиояҙмалар тыңлағыҙ. Ни тиклем кирегә көйләнгән булһағыҙ, тормош ҡуйылышын 180 градусҡа бороу өсөн шул тиклем күберәк ваҡыт кәрәк буласаҡ. Әгәр үҙегеҙгә тап килгән аҡыл "аҙығына" диета һаҡлаһағыҙ, моғайын да, ыңғай көйләнешкә эйә була алырһығыҙ.
- Һәр көн ниндәй ҙә булһа маҡсатҡа өлгәшегеҙ. Ҡайһы бер кешеләр кире көйләнештең тәрән коляһына эләгеп, алға бара алмай. Шуның өсөн алдығыҙға көн һайын үтәй алырлыҡ маҡсаттар ҡуйығыҙ. Ыңғай ҡаҙаныштарға ғәҙәтләнеү һеҙҙә ыңғай фекерләү ғәҙәтен дә барлыҡҡа килтерәсәк.
- Беҙ барыбыҙ ҙа дөрөҫ итеп уйлау тураһында кемдендер иҫебеҙгә төшөрөүенә мохтажбыҙ. Шуға күрә, үҙегеҙҙе дәртләндереүсе нәмәне табып, уны стенағыҙға, даими күҙ уңына салынып торған урынға элегеҙ.

**Джон МАКСВЕЛЛ.**



## 4 АВГУСТА ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.05 "Добрый день".
15.00 Новости (с субтитрами).
15.20 "Ясмин". Мелодраматический сериал (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Личная жизнь следователя Савельева". Детективный сериал. 9-я и 10-я серии (16+).
23.30 "Гоморра". Криминальный сериал (16+).
01.30, 03.05 "Дерево Джошуа" (16+).
03.00 Новости.
03.30 "В наше время" (12+).
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ты - это мир!"
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Девчата" (16+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.45 "Вести-Башкортостан".
18.05 "Вести. Дежурная часть".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Земский доктор. Возвращение". Сериал. Часть 1-я.
00.40 "Операция "Большой вальс". Док. фильм (12+).
01.45 "Короли российского сыска". 1-я серия. Детективный сериал.
02.55 "Ты - это мир!"
03.50 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Замандаштар". Флүрә Арыҫланғолова (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Поэзия". Шиғырҙар (6+)
